Тауыш, шау-шыуҙар ваҡытында ҡыҙыу ҡанлылыҡҡа юл ҡуймау, түҙемлек күрһәтеү, сабырлыҡ һаҡлау киммәт. "Асыу менән ағарынған үкенес менән ҡыҙарыр" ти бындай саҡта боронғолар. Үҙен һәр кемдән кесерәк күргәндәр бөйөктөр. Кеселеклелек, маһаймау кешелектең иң ҙур өҫтөнлөгө. Һәр бер эштең урталығы гүзәлдер.

Аҡһаҡалдар аҡылы.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№16 (434)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Әҙиптәр ҡор йыйҙы**



4

**Башҡорт халҡы тарихына...**

тағы бер бит өҫтәлде




5

**Аңыбыҙға киләйек, туғандар!**



6-7 Йәштәребеҙ оло афәт хаҡында саң ҡаға

**Рухы һәм тәне һау кешеләргә...**

яҡынираҡ йөрөгөҙ



8-9

14 ТВ-программа


БЕҘҘЕҢ ФАРАЗ ОШО

# ЭЙ, ЕҢЕЛМӘҪ САЛАУАТ!



Бер тибештә миллион йөрәк,
Бер маҡсатта миллион уй.
Юлай улы Салауаттың
Урамында бөгөн туй.
Ике атыңдың берен һуй,
Ун атыңдың бишен һуй!

"Салауат - чемпион!" тиеп
Өфө зекер әйткәне.
Ҡыуандыҡов Искәндәрҙең*
Бейеп-бейеп киткәне.
Салауаттың ҡылысындай
Ҡулындағы сәкәне.

Эй, халҡымдың батыр улы
Эй, еңелмәҫ Салауат!
Үткән эшкә салауат та,
Бөгөнгөгә әйтер ант,
Башҡортостан - илебеҙҙе
Киләсәккә илтер ат.

Евразия ҡитғаһында
Башҡорт рухын балҡытып,
Рухың беҙгә ярҙам итте,
Быуаттарҙы ҡалҡытып,
Көнсөлдәрҙе шаңҡытып та,
Ғәмһеҙҙе зар илатып.

Хоккей нимә, беҙ үлемдең
Үҙен еңдек, Салауат!
Халҡың яңы һынау тота,
Аҫтыбыҙҙа - Заманат!
Һинең доға-исемеңдә
Ҡабатлайбыҙ, Салауат!

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.



*Ҡыуандыҡов Искәндәр - Радулов Александр.

*ИШАРА*

# МӘ, КӘНФИТ АШАЙҺЫҢМЫ?

**Кәртә-ҡурала эште бөтөрөп, малдарҙы теүәлләп индем дә диванға ауҙым - телевизор ҡарарға. Каналдан-каналға "һикереп", иғтибарҙы йәлеп итерҙәй тапшырыу эҙләй торғас, Ельцин тураһындағыһына туҡталдым. 90-сы йылдарҙа ил буйлап суверенитет таратып ятҡан сағын күрһәтәләр. Ысынлап та, ул ваҡыттағы ҡоласҡа һыймаҫлыҡ суверенитеттан күпмелер ваҡыт иҫерешеп йөрөнөк шул.**

Суверенитет хәтирәләрен барлап ултырғанда, ҡырҡ йыллап элек булған бер ваҡиға ҡылт итеп иҫкә төштө. Ул мәлдә миңә күп булһа ун-ун бер йәш тирәһе ине. Өй алдына сығып, яңғыҙым ғына уйнап йөрөһәм, эргәмә минән дүрт-биш йәшкә өлкәнерәк күрше малай килде. Ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡҡан. Ҡабаланмай ғына кеҫәһенән шоколад-кәнфит сығарҙы ла, ҡағыҙынан айырып алып, алғы ике теше менән ҡап уртаға тешләп, ашыҡмай ғына сәйнәй, һура башланы.

Ул мәлдәрҙә шоколад, кәнфит өләсәйҙәр һандығының иң төпкө мөйөшөндә генә һаҡлана, ҡәҙерле ҡунаҡ килһә генә өҫтәлгә ҡуйыла торған затлы ризыҡ ине. Һүҙ юҡ, был мәл беҙҙең өсөн ҙур байрамға әйләнә торғайны.

Күрше малай ҡапҡан кәнфитен сәйнәп йотоп ебәрҙе лә икенсе яртыһын ҡабырға ауыҙын асты һәм... ҡапыл уны миңә һуҙҙы: "Мә, ашайһыңмы?" Мин аптырандым. Берҙән, кеше тешләмен ашап өйрәнмәгәнмен, икенсенән, ашап ҡарағы ла килә, өсөнсөнән, уның ҡара эсле яһил малай икәнен дә яҡшы беләм. Шулай ҙа түҙмәнем, ҡулымды һуҙҙым. Ул шуны ғына көткән, күрәһең, миңә һуҙған кәнфитен ҡапыл үҙ ауыҙына оҙатты. Үҙе ҡәнәғәт йылмая: "Ана, юл ситтәренән шешәләр йыйып, йыуып тапшыр ҙа, һатып алып аша. Бер шешә ун ике тин тора, һәр шешәгә ике-өс кәнфит килә", - ти. Уҡыуы насар булһа ла, иҫәпкә шәп, ҡәһәрең.

Ул мәлдә ғәрләнеүемде һүҙ менән аңлатып бирерлек түгел. Ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт уҙҙы, ә күңелдә һаман бер төйөр, майлы тап тора һымаҡ.

Телевизорҙан ҡараған "өлкән ағай" менән минең күрше малайҙың ҡыланышында уртаҡлыҡ күргәндәй булдым...

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЯМАН ИЛДЕҢ ЯҠШЫҺЫ БУЛҒАНСЫ,

## яҡшы илдең яманы бул...

**Был әйтемдең синонимы - "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул" әйтеме. Шулай ҙа "Яман илдең яҡшыһы булғансы, яҡшы илдең яманы бул" тигәндә фекер тәрәнерәк, йөкмәтке киңерәк, минеңсә. Сөнки ошо ике әйтемдәге "яҡшы" менән "солтан", "яман" менән "олтан" һүҙҙәрен бер үк мәғәнәләге һүҙҙәр тип әйтеп булмай. Ошо хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ, булмаһа.**

Был әйтемде туранан-тура мәғәнәһендә аңларға тырышҡанда, шулайыраҡ итеп фекер йөрөтөргә мөмкин булыр ине:

-Илең яман булып, һин нисек кенә яҡшы, изге күңелле булма, яҡшылығың күпселек тарафынан барыбер яманлыҡ тип ҡабул ителәсәк. Сөнки ямандың уйниәте лә яман. Яман үҙенә ҡаршы булғанды, ҡараштары тура килмәгәнде логика буйынса (терпе лә балаһына "йомшағым", ти) барыбер дошман итеп күрә, яуызлыҡ сығанағы тип иҫәпләй. Миҫалға ҡайһы бер дәүләттәрҙә барған азатлыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең агрессорҙар тарафынан террористар, бандиттар тип аталыуын ғына алайыҡ.

-Илең яҡшы булып, һин нисек кенә яман булһаң да, яманлығың күпселек тарафынан оло бәлә итеп ҡабул ителмәйәсәк, сөнки яҡшының уй-ниәте лә яҡшы. Икенсенән, яҡшылыҡ менән изгелек яманлыҡ менән яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшә башлаһа, үҙҙәре лә тегеләр юлына баҫа. Шуға күрә яҡшы илдә яманлыҡты күп осраҡта балалар тәрбиәләгәндә ғибрәт булараҡ файҙаланыу зарур.

Әммә был аңлатмалар айсбергтың диңгеҙ өҫтөнә сығып торған өлөшөн генә күрһәтә булыр, моғайын. Тағы ла төпкәрәк ҡарайыҡ: һыу төбөнә төшәйек, диңгеҙ һыуын эсәйек. Яман илгә яҡшы булып ярап буламы ла, яҡшы илдә яман булып ҡалып буламы?

Бер яҡшыға - бер яҡшы,
Бер яманға - бер яман.
Был донъяла гармония
Булыр әле бер заман,

ти шағир Рәшит Шәкүр. Әлбиттә, бында тормоштағы гармонияға ынтылған шағир хыялы сағыла. Ҡана һуң, шулай булғанда, камил йәмғиәт төҙөй алыр инек, тип ҡуяһың. Әммә, төптән уйлап ҡараһаң, ҡапма-ҡаршылыҡты, идеялар көрәшен инҡар иткән йәмғиәт, ойошма үҙе үк юҡҡа сыға башлай. Бында иң мөһиме хикмәт ҡайһы яҡтың еңеп сығыуында. Ошо уҡ фекерҙе юғарылағы әйтемгә бороп ҡараһаҡ, ысынлап та, яман илдең яҡшыһы булғансы, яҡшы илдең яманы булғаның яҡшы. Сөнки яҡшы илдә яҡшылыҡ күпселекте тәшкил итә һәм еңеп сыға, яман илдә, киреһенсә, хатта бер данала булған яҡшылыҡ та еңелә. Хәйер был осраҡта: "Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың", - ти халыҡ мәҡәле.

Әйтемдең тағы ла төпкәрәк йәшеренгән мәғәнәһе бер илдең, милләттең вәкиле булараҡ, үҙ илеңә, милләтеңә, бер һүҙ менән әйткәндә, асылыңа тоғролоҡҡа барып ялғана. Яҡшы илдең яманы булған осраҡта ла, кеше үҙ иленә тоғро булырға бурыслы. Ә бит бында эргәндәге яман илгә сығып китеү мөмкинлегең дә бар. Тик ул осраҡта, үҙең яман булһаң да, яман илгә яҡшы булып ярарға тырышаһың. Сөнки ул ил, милләт, яман булған осраҡта ла, һине яман булараҡ ҡабул итмәйәсәк. Дөрөҫөн әйткәндә, был әйтемдә бер милләт вәкиленең икенсе милләт вәкиле булып китеүенең психологик кардиограммаһы яҙылған һымаҡ. Шулай ҙа әйтем кешене үҙ асылына, иленә һәм милләтенә тоғролоҡ һаҡларға өндәй икән, ул һис шикһеҙ милли идеяға торошло.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*КЕМ АЛЫҠ!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу дауам итә. Вәғәҙә итеүебеҙсә, апрелдә лә гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" тип әйтмәксебеҙ. Сираттағы бағыусыбыҙ был юлы кеҫә телефоны тәҡдим итә.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**



Благовещен районының башҡорт теле уҡытыусылары.

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Волга буйы федераль округы Советы ултырышында ҡатнашты. Ултырыш яҙғы баҫыу эштәрен үткәреү һәм Волга буйы субъекттарында малсылыҡты үҫтереү мәсьәләләренә арналды. Рөстәм Зәки улы үҙенең сығышында Башҡортостандың яңы ауыл хужалығы миҙгеленә әҙерлеге тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, республикала 500 мең гектарҙағы ужым культуралары торошо яҡшы тип иҫәпләнә, яҡынса 150 мең гектарҙа ужым яңынан сәселәсәк. Быйыл сәсеү майҙаны 3 млн гектарҙан артып китәсәк, был былтырғы менән сағыштырғанда 7 процентҡа күберәк.

✓ "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы -2011" республика конкурсы тамамланды. Бер аҙна буйы барған бәйгелә республиканың 123 уҡытыусыһы көс һынашты. "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" исеменә баш ҡаланың 101-се урта мәктәбе уҡытыусыһы Инна Бодрова, "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" исеменә Дүртөйлө районы Семилетка урта мәктәбе уҡытыусыһы Заһиҙә Камалова, ә "Йыл уҡытыусыһы-2011" исеменә Туймазы ҡалаһының 1-се гимназияһы уҡытыусыһы Евгений Ромадов лайыҡ булды.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов донъяла яҫы быяла, быяла һауыттар һәм төргәктәр, төҙөлөш продукцияһы, юғары технологиялы материалдар етештереүе менән билдәле булған "Сен-Гобен" концернының БДБ буйынса президенты Тьери Фурньер менән осрашты. Был предприятие Башҡортостанда гипс ятҡылығын эшкәртеү хоҡуғына эйә булған. Улар шулай уҡ гипс әйберҙәр етештереү буйынса завод төҙөргә лә йыйына. 2014-2015 йылдарҙа төҙөлөп бөтәсәк һәм йылына 30 млн квадрат метр гипс ҡатырғаһы етештерәсәк был проектты тормошҡа ашырыу йөҙҙәрсә эш урыны булдырасаҡ.

✓ Архангел муниципаль районы хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Ғимран Ғәбитов тәғәйенләнде.

✓ Башҡортостан йылҡы малы һаны буйынса Рәсәйҙә беренсе урынды биләй. Әле республикала 129 мең баш йылҡы малы иҫәпләнә. Якутия беҙҙән саҡ ҡына ҡалыша. 1990 йылда беҙҙә 190 мең баш йылҡы малы булған.

✔ *Күберәк тел белгән һайын, донъяға ҡарашың да киңерәк була, төрлө хәл-торошто баһалауҙа ла телдәрҙең ярҙамы ҙур. Шуға мин халыҡтарҙың, исмаһам, күрше халыҡтарҙың телдәрен өйрәнеү яҡлы.*



ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"Мәхмүд Аббас менән инглиз, өлөшләтә урыҫ һәм ғәрәп телдәрендә аралаштыҡ. Башҡорт теленда ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр күп. Шуға күрә башҡорт телендәге һүҙ запасы ла ҡотҡарҙы. Ологая килә генә телдәр белеүҙең әһәмиәтен аңлайһың, шуныһы йәл. Йәшлектә, исмаһам, аралашырлыҡ ҡына булһа ла 4-5 тел өйрәнергә кем ҡамасаулаған? Бер нисә Европа теле, мотлаҡ ғәрәп теле һәм аҙ ғына ҡытай теле. Беҙҙең йәшлек осоронда сит илгә барыу буй етмәҫлек хыял ғына ине. Сит телдәр кәрәкмәне лә тиерлек. Бары техник әҙәбиәтте уҡыу өсөн генә кәрәк булды улар. Ә хәҙер сәфәр, эш, аралашыу өсөн күпме мөмкинлек бар! Йәштәргә мөрәжәғәт итәм. Дуҫтар! Телдәр өйрәнегеҙ! Был бик кәрәк. Донъя һеҙҙең алдығыҙҙа бөтөнләй икенсе яҡлап асылыр. Мәҫәлән, башҡорт телен өйрәнеп, төрки телдәргә, ғәрәп теленә үҙенә күрә бер күпер һалаһың. Джидда форумы кулуарҙарында мин Төркиәнең премьеры Рәджэп Эрдоған менән таныштым. Беҙ, һәр кем үҙ телендә: ул - төрөксә, мин - башҡортса һөйләшеп, бер-беребеҙҙе яҡшы аңланыҡ! Тағы бер ҡабатлайым: телдәрҙе өйрәнегеҙ!" Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың үҙ блогына сығарған сираттағы темаһы бер үк ваҡытта оран да, йәштәргә наказ да булып яңғыраны. Сөнки һуңғы ваҡытта, мәғариф системаһын реформалау, оптималләштереү һылтауы менән телдәргә, бигерәк тә башҡорт теленә һәм милли компонент предметтарына, баҫым көсәйҙе. Тап шул саҡта дәүләт башлығының урынлы әйткән һүҙе ҡайнар баштарҙы тынысландырҙы. Бөгөн Президент телдәр өйрәнеүҙең, шул иҫәптән башҡорт телен дә өйрәнеүҙең ни тиклем әһәмиәтле булыуын билдәләне. Был хаҡта блогерҙар ни уйлай икән, әйҙәгеҙ, күҙ һалайыҡ.**

# ДОНЪЯ МЕНӘН ХАКИМЛЫҠ ИТКЕҢ КИЛӘМЕ?

## Телдәр өйрән!

**cartman2484.** Телдәр өйрәнеүҙең бер ысулы (аралашыу кимәлендә):
- уҡырға өйрәнеү өсөн алфавитты ятларға;
- һәр көн өс һүҙ ятларға;
- ошо телдә текстар уҡырға кәрәк. Өс айҙан һуң таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлай башлайһың. Быны минә тәҡдим итеүсе ошо ысул менән өс тел өйрәнгән.

**o_gaisin.** Республикала күпселек халыҡ полиглот инде - урыҫ, башҡорт, татар телдәрен беләләр...

**irina_kamalieva.** Минеңсә, мәктәптәрҙә сит телдәрҙе уҡытыу методикаһы тураһында уйланырға урын бар. Мәктәптә 7 йыл (хәҙер 10 йыл) инглиз теле өйрәндек, университетта - бер-ике йыл. Күп кенә ваҡыт килеп сыға. Ошо ваҡытта теләһә ниндәй телдә матур һөйләшергә өйрәнергә була. Сит телде насар белеү - уҡытыусыларҙың етешһеҙлектәр йәки тел мохитенең булмауы һөҙөмтәһе...

**valekchanin.** Быға тиклем дә яҙғайным инде: мәктәптә белем биреүҙе үҙгәртеп ҡорорға, сит телдәрҙе тәрәнәйтеп өйрәтеп, артабан ҡайһы бер фәндәрҙе сит телдә уҡытыуға күсеү, бөтөн мәктәптәрҙә лә мотлаҡ инглиз телен уҡытыу, ҡайһы бер мәктәптәрҙә башҡа телдәр буйынса, ғәрәп, ҡытай, япон телдәрен индереп, махсуслаштырырға. Институтта техник сит телде уҡытырға.

**557474.** Мәктәптәрҙә әлеге уҡытыу менән беҙҙең балалар бер нәмә лә белмәйәсәк. Беҙҙең мәктәптәр һәр саҡ ғорурланған методика бөтөнләй ҡулланылмай. Башҡорт теле шундай итеп уҡытыла, хатта 2-3-сө синыф балалары өйгә ҡайтҡас, бер нәмә лә өйрәтмәгәндәрен белдерә... Нисәмә йылдар инде сит ил телен өйрәнеү билдәле йәшкә тиклем уйын, аралашыу формаһында булырға тейеш, тип һөйләйбеҙ, ә һөҙөмтәлә балаларға ятлау өйөлә. Шиғыр, йырҙар юҡ, бары тик ятлап алыу ғына.

**v_nail.** Илебеҙҙең төрлө халыҡтарының телдәрен өйрәнеү зарурлығы тыуыуы бик яҡшы. Глобалләшеү һәм үҙгәрештәр эпохаһында, дәүләттәр араһында үҙ-ара бәйләнештәр киңәйгән һәм тәрәнәйгәндә башҡа халыҡтарҙың телдәрен белеү - зарурлыҡ ҡына түгел, ихтыяж да. Рәсәйҙә күпмелер ваҡыт элек бер нисә тел белеү ғәҙәти һаналған. Эшем буйынса Азияның һәм Европаның күпселек илдәрендә булырға тура килде. Башҡа илдәрҙәге халыҡтың һөйләш теленә иғтибар итеп, донъяның барлыҡ телдәренең дә ниндәйҙер уртаҡлығы бар тигән һығымтаға килдем. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында хатта эсперанто хәрәкәте лә бар ине. Йәғни донъяның барлыҡ халыҡтарын берләштереүсе бер телдә һөйләшеүселәр хәрәкәте.

Тәүратта, Ҡөрьәндә, башҡа изге китаптарҙа халыҡ-ара бер аралашыу теле тураһында аныҡ әйтелә. Ғалимдарҙың дәлилдәре буйынса, был тел Рәсәйҙә, әле беҙ йәшәгән Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килгән.

Ә телдәрҙе өйрәнергә кәрәк. Башҡа мәҙәниәттәрҙе тел аралашыуы аша аңлау халыҡтарҙы берләштерә.

**aygiz74.** Ҡайһы берәүҙәр башҡорт телен көсләп уҡыталар, ти. Был фекер дөрөҫ түгел (яҡлаулыҡ ҡына). Ни өсөн? Сөнки беҙ, башҡорттар, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙә йәшәйбеҙ, үҙ телебеҙҙе белергә тейешбеҙ. Әгәр башҡорт телен белһәң, татар, уйғыр, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарасәй телдәрен аңлайһың. Урыҫ халҡы менән аралашыу өсөн беҙ урыҫ телен дә өйрәнәбеҙ. Был да плюс, сөнки ул өҫтөмә рәүештә фәнни, әҙәби, тарихи материалдарҙы өйрәнергә ярҙам итә.

Мин үҙем Төркиәлә уҡыным, төрөк телен белеүем аша барлыҡ төрки телле мәҙәниәттәрҙе өйрәнә һәм аралаша алам. Үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм, күберәк тел белгән һайын, донъяға ҡарашың да киңерәк була, төрлө хәл-торошто баһалауҙа ла телдәрҙең ярҙамы ҙур. Шуға мин халыҡтарҙың, исмаһам, күрше халыҡтарҙың телдәрен өйрәнеү яҡлы.

**gali_vali.** Мәктәптә башҡорт телен өйрәнеү буйынса бәхәс тәрәнәйә бара. Проблема "мәңгелек"тәр иҫәбенән, сөнки мәғарифтың йөкмәткеһенә ҡағыла. Мәктәптә нимә өйрәтергә кәрәк? Теге йәки был белемдең ҡиммәтенә ҡарата ике ҡараш бар: 1) белем - йәшәү өсөн кәрәкле ғәмәли бурыстарҙы хәл итеү сараһы; 2) белем - рухи мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсаты. Башҡортостан халҡының яртыһы прагматик позицияға таянып, мәктәптәрҙә башҡорт телен көсләп уҡытыуҙы бөтөрөү яҡлы, икенсе өлөшө ҡаршы позицияла тора, сөнки тап шунда башҡорт халҡының менталитетын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшыраҡ аңлау юлын күрә. Проблеманы хәл итеү педагогик киңлектә түгел, ә идеологияла. Дәүләт милли идея формалаштырырға тейеш, һуңынан инде төп маҡсатты билдәләргә мөмкин, уға ярашлы мәктәптә белем биреүҙең йөкмәткеһен асыҡларға була, йәғни ниндәй телдәрҙе ниндәй күләмдә өйрәнергә хәл итергә.

**rodnik60.** Мин ризамын, телдәр кәрәк! Әммә мәктәптә ҡыҙым татар телен һәм башҡорт телен параллель өйрәнә. Ике яҡын тел һәм күпме проблема. Икеһен дә бишлегә белә, бындай осраҡта берәүһен генә ҡалдырырға кәрәк тип уйлайым. Башҡорт телен белһә, ул татар телендә һөйләшә һәм аңлай аласаҡ. Ә татар теле сәғәттәрен урыҫ теленә йәки инглиз теленә бирергә мөмкин.

**tuimazinki.** Улыбыҙҙы, ирем менән минең ризалыҡтан тыш, ирем башҡорт булғаны өсөн башҡорт төркөмөнә яҙып ҡуйғандар. Беҙ урыҫ телен өйрәтергә теләгәйнек. Рөхсәт итәмәйәсәктәр, тинеләр. Башҡорт теле аҙнаһына биш сәғәт, ә урыҫ теле өс кенә сәғәт. Урыҫ төркөмөндә, әлбиттә, урыҫ теле сәғәттәре аҙнаһына бишәү. Күптән түгел класс диктант яҙҙы, башҡорт төркөмөндәгеләр 3/3 баһаһынан артыҡ күтәрелмәне, туған урыҫ телен өйрәнеүселәр 4-кә, 5-кә яҙҙы. Мәктәпте тамамлағас, башҡорт төркөмө балалары ҡайҙа барыр? Уларҙы ПТУ-лар ғына көтә инде. Бер нисә йылдан һуң кем ниндәй төркөмдә уҡыған һәм кем ҡайҙа уҡырға ингәне күренер. Ғәҙәти бер нәмәне әйткем килә - урыҫ теле юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү өсөн кәрәк. Урыҫ теле буйынса улар нисек БДИ тапшырыр? Беҙҙең балаларыбыҙ был фәнде яратмай һәм был хәҡиҡәт. Уны бик ҡатмарлы итеп уҡыталар. Балаларҙы милли билдәләре буйынса бүлергә түгел, ә барыһын да башҡорт һөйләш теленә өйрәтергә кәрәк. Быны өсөн икеле ҡуйырға ла, аттестатты өсләләр менән бысратырға ла ярамай.

**macklamborghini.** Туған тел - донъяны танып белеү асҡысы ул.

Сит телдәр өйрәнерҙән алда, тәүҙә үҙеңә туған телеңдең - әсәйҙең бишек йырының, атайҙың, донъяны таныу базисы теленең мәҙәниәтен һеңдерергә кәрәк. Һәр ҡайһыбыҙ уны белергә һәм үҙ нәҫеленең йолаларын тотоп йәшәргә тейеш. Ҡайһы берҙә урамда йәштәрҙең һөйләшеүенә ҡолаҡ һалһаң, һүгенеү, шикле һүҙҙәр ҡыҫтырып аралашыуын, телде нисек бысратыуын күрербеҙ. Былар барыһы ла кешенең үҙ телен яҡшы белмәүенән килә. Ябайлаштырып әйткәндә, йәштәр ике мәҙәниәт араһында аҫылынып ҡалған, береһенеке лә булып китә алмаған. Был - йәмғиәтте глобалләштереүҙең беренсе ҡорбаны. Аҡыл әйәләре, үҙ нәҫелен белмәгән халыҡтың киләсәге юҡ, ти. Быуындар бәйләнеше юғала, рухи ҡиммәттәре булмаған быуын һөйөү ҙә, кеше хәленә инеү ҙә, ҡайһы берҙә тормош мәғәнәһе лә, уның ҡыҙығы ла булмаған ябай биологик ҡулланыусы массаға әүерелә.

(Дауамы 15-се биттә).

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда башланған урман һәм баҡса айлығында 10 мең гектар урманды тергеҙеү планлаштырыла. Былтыр ошондай айлыкта 9 мең кеше ҡатнашҡайны һәм 6,3 мең гектар майҙанға урман культуралары ултыртылғайны.

✔Башҡортостан полицейскийҙары на ошо көндәрҙә 16 автомобиль һәм Бөрө, Баймаҡ, Дүртөйлө, Мәләүез ҡалалары, Күгәрсен, Краснокама, Ҡариҙел һәм Нуриман райондары өсөн 8 патруль катеры тапшырылды. Хәбәр итеүенсә, Эске эштәр министрлығында енел автомобиль менән тәьмин ителеш 90,6 процент тәшкил итә.

✔Берҙәм федераль өлгөләге яңы һунарсылар билеты быйыл 1 июлдән бирелә башлаясаҡ. Был документтың сроғы һәм территорияһы сикләнмәгән буласаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 272-83-68, 273-96-32.

✔З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты Диләрә Иҙрисова республика конкурстарында сығыш яһап, танылыу яуларға өлгәргәйне инде. Был юлы ул Италияла үткән "XXI быуат сәнғәте" халыҡ-ара конкурсында сығыш яһаны һәм Гран-при яуланы. Диләрә "Академик йыр" номинацияһында Рәсәйҙән, Әрмәнстандың, Украина, Италия, Латвия һәм Данияның 20 ҡатнашыусыһы араһында 3. Исмәғилевтың романстарын, шулай уҡ башҡорт халыҡ йыры "Таштуғай"ҙы йырлап, иң яҡшы йырсы итеп танытты үҙен. Ул Финляндияла үтәсәк халыҡ-ара конкурсҡа ла саҡырыу алды.

✔Башҡортостан хеҙмәт баҙарында ҙур һорау менән файҙаланған һөнәрҙәр иҫәбенә төрлө өлкәлә һатыу менән шөғөлләнә алған белгестәр, инженерҙар, технологтар, инглиз телен белгән техник белгестәр, IT-программистар инә. Шулай уҡ менеджерҙар, инвестиция консультанттары, финанс аналитиктары, клиенттар хеҙмәте һәм сауҙа бүлектәре етәкселәре, сауҙа һәм медицина вәкилдәре, логистик һәм маркетологтар ҙа бик кәрәкле һөнәрҙәр булып иҫәпләнә. Кассирҙар, һатыусылар, call-үҙәк операторҙары, ашнаҡсылар, электромонтерҙар, тәҙәүселәр, тракторсылар, бульдозерсылар, иретеп йәбештереүселәр һәм ташсылар ҙа етешмәй.

✔23-30 апрелдә Башҡортостандың барлыҡ ҡалаларында һәм райондарында Европа иммунизация аҙналығы сиктәрендәге саралар үтәсәк.

ТУҠТА, МӘЛ!

# ӘҘИПТӘР ҠОР ЙЫЙҘЫ

**Өфөлә Башҡортостан Республикаһы яҙыусыларының XV съезы булып үтте. Яҙыусылар союзы ағзаһы булған 150-ләп делегат ҡатнашҡан форумды Башҡортостан Республикаһы Президенты сәләмләне. Рөстәм Зәки улы үҙенең сығышында яҙыусыларҙы йәмғиәттең әхлаҡи йүнәлеш биреүселәре һәм рухи үсеште тәьмин итеүселәре, тип атаны. "Әҙиптән башҡа берәү ҙә халыҡтың үйҙарын һәм тойғоларын асыҡ итеп әйтеп бирә алмай. Шуға ла яҙыусының ролен баһалап бөтөү мөмкин түгел", тине Президент.**













Юлай КӘРИМОВ фотолары.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ЮҒАРЫ СИФАТ АРТЫНАН...

## Сәғүд Ғәрәбстаны беҙгә килде

**Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге генераль директоры Әмир Ишемғолов һәм Сәғүд Ғәрәбстанының "Бал баҡсаһы" компанияһы оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

Килешеүгә ярашлы, бар донъяға билдәле башҡорт балы Сәғүд Ғәрәбстанында ла һатыла башлаясаҡ. Шулай уҡ гәрәптәрҙә бал менән бер рәттән йүкәнән эшләнгән, башҡорт стилендә биҙәлгән ағас һауыттар һәм үҙәктә етештерелгән биҙәнеү әйберҙәре лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Был килешеүгә ярашлы, башҡорт балының тәүге партияһы Сәғүд Ғәрәбстанына август айында оҙатыла башлаясаҡ. "Үҙ ғүмеремдә күп илдәрҙән килтерелгән төрлө сорт балдарҙы тәмләп ҡараным. Сәғүд Ғәрәбстанында бал баҙары ныҡ үҫешкән һәм унда Европа, Аргентина, Мексика һәм башҡа күп илдәрҙән унлаған төр бал продукцияһы килтерелә, - ти "Бал баҡсаһы" компанияһы ойоштороусыларының береһе Майсара Машаль. - Ләкин башҡорт балы иң яҡшы бал булып сыҡты. Уның йомшаҡ, ғәҙәти булмаған тәме беҙҙең һатып алыусыларға оҡшаясаҡ, тип уйлайым. Беҙ Башҡортостанға юғары сифат һатып алырға килдек".

Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге өсөн сит илдәр менән бәйләнеш тәүгә түгел. Коллектив күптән инде башҡорт балын Америка, Франция, Италия һәм башҡа Көнбайыш илдәренә сығара. Ләкин был ваҡыт эсендә һатыу күләмен күпкә арттырып булманы, сөнки Көнбайыш халҡы, башҡорт балының юғары сифатлы булыуына ҡарамаҫтан, үҙ илдәрендә ҡуйылған хаҡтан артыҡ түләргә теләмәй. "Шуға күрә һуңғы дүрт йылда беҙ ғәрәп илдәре менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштырыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Был илдәрҙә, Көнбайыштан айырмалы рәүештә, сифат өсөн тейешле хаҡ түләргә әҙерҙәр. Шулай итеп тауарҙың хаҡы беҙҙә лә, ғәрәп партнерҙарын да ҡәнәғәтләндерәсәк", - тине Әмир Ишемғолов.

# ҒАИЛӘЛӘ ӨСӨНСӨ БАЛА БАРМЫ?

## Ер алығыҙ!

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте республика Парламентына ғаиләлә өсөнсө бала тыуһа йәки уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынһа, ғаиләне бушлай ер биләмәһе менән тәьмин итеүҙе тәҡдим иткән закон проекты индерҙе.**

Проект 2011 йылдың 1 ғинуарынан һуң ғаиләлә өсөнсө бала тыуһа, ата-әсә дәүләт йәки муниципаль милектән бушлай ер алыу хоҡуғына эйә булыуын нарыҡлай. Парламент депутаттары тәҡдимде әһәмиәтле тип тапты, ләкин ҡайһы бер етешһеҙлектәрен дә күрһәтте. Закон проектында бүленәсәк ер биләмәһенең ҡайҙа урынлашыуын, уның ҙурлығы һәм был ерҙә күпме ваҡыт эсендә өй төҙөлөүе хаҡында асыҡ яҙылырға тейешлеген белдереп, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар закон проектына төҙәтмәләр индереү кәрәклеген билдәләне. Ғәмәлдәге законға ярашлы, республикала бөгөн дә, бала һанына ҡарамайынса, ер биләмәһенә мохтаж йәш ғаиләләргә ер бүлеү ҡаралған. Шуға күрә, был тармаҡта хәлде киҫкенләтмәҫ өсөн яңы закон нормаларын индереү айырыуса һаҡлыҡ талап итә.

- Ер алыу - ул торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүҙе аңлатмай. Өй төҙөү өсөн дә күп сығымдар талап ителә. Кешеләргә, мәҫәлән, урманда ер бүлеп, биләмәне таҙалап, ҡырҡылған ағасты өй һалыу өсөн тотоноу шартын да ҡуйырға мөмкин, - тип иҫәпләй комитеттың аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу буйынса рәйесе урынбаҫары Валерий Лебедьков. Был мәсьәләне Ҡоролтай ултырышына сығарырға хәл ителде.

# ӨФӨ ҮҪҺЕН ӨСӨН...

## юлдар, күперҙәр кәрәк

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтенең архитектура һәм төҙөлөш баш идаралығы начальнигы Рәмзит Маскулов баш ҡаланы төҙөүгә бәйле комплекслы саралар тураһында кәңәшмә уҙғарҙы.**

- 1995 йылда ил иҡтисадының баҙар шарттарына күсеүе менән бәйле Өфө ҡалаһының 2025 йылға тиклемге үҫеш прогнозын билдәләүсе төп документ - Генераль план эшләнгәйне. Сәйәси, ижтимағи, иҡтисади хәлдәрҙең, технологияларҙың үҙгәреүе сәбәпле 2005 йылда документҡа төҙәтмәләр индерелде. Баш ҡала округы Советы тарафынан раҫланған Генераль план проектын тормошҡа ашырыу буйынса эштәр тулы ҡеүәт менән бара, - тине баш архитектор кәңәшмәне асып.

Рәмзит Мөнир улы билдәләүенсә, төҙөлөштә комплекслы ойоштороу - бөгөнгө көндә айырым нөктәләрҙе генә төҙөүгә ҡарағанда өҫтөнөрәк йүнәлеш булып тора. Территорияларҙы комплекслы ҡулланыу үҙ сиратында һатыу нөктәләренең, ижтимағи, инженер һәм транспорт инфраструктураларын халыҡ йәшәгән урындарға яҡынайтыуҙы күҙ уңында тота.

Кәңәшмәлә юлдар, транспорт хәрәкәтен көйләү һәм башҡа саралар тураһында айырым әйтелде: "Төҙөлөш эштәрен планлаштырған ваҡытта иң беренсе сиратта йәмәғәт транспортының өҙөлөкһөҙ хәрәкәтен, парковка урындарының етерлек булыуын хәл итеү талап ителә", - тине Р. Маскулов.

Белгес Глумилино биҫтәһенә айырым туҡталды. Был биҫтәгә илткән юлдар мәсьәләһен хәл итеү әлегә беренсе планда тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Инженер селтәрҙәре менән тотҡарлыҡтар әлегә юҡ түгел, - тине ул. - Юлдарҙы киңәйтеү, заман талаптарына яуап биргән күперҙәр төҙөү көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Киләсәктә Өфө ҡалаһында бер-нисә яңы күпер ҙә төҙөләсәк. Киләсәктә Романовка биҫтәһендә парк зоналары, сауҙа үҙәктәре, административ бина元 барлыҡҡа киләсәк. Күпмелер ваҡыттан һуң Романовка йәшәү өсөн бик уңайлы биҫтәгә әүереләсәк".

Өфө-2 ҡаласығын өйрәнеү, киләсәктә уны үҙенсәлекле туристик комплекс булараҡ ҡулланыуға йүнәлтелгән эштәр башҡарыуҙы баш архитектор киләһе быуын өсөн иң әһәмиәтле сара, тип атаны.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев быйыл июндә Рәсәй, Салауат Юлаев һәм Өфө ҡалаһы көндәренә арналған байрам саралары үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡала биләмәһендәге әйләнә-тирә мөхиттең торошо тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, баш ҡаланың һауа бассейнына 700-ләп предприятиенең бысраҡ ҡалдыҡтары ташлана, нефть эшкәртеү предприятиелары ҡалдыҡтары шул бысраҡтың 73 процентын, электр энергетикаһы предприятиеларыныҡы 17 процентын тәшкил итә. Ҡалған сығанаҡтар - автотранспорттыҡы. Былтыр һауаны бысратыусы ҡалдыҡтарҙың тулайым күләме 355 мең тонна булған.

✓Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ Өфөлә үткәрелгән социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре тураһында ла мәғлүмәт тыңланды. Был юлы халыҡтан баш ҡалалағы криминоген хәл, ғаилә мәсьәләләре, социаль яҡлау һәм мәғариф тураһында һорау бирелгән. Билдәләнеүенсә, һорау алынған 1450 өфөләнең 59 проценты баш ҡалалағы криминоген хәлде ҡәнәғәтләнерлек тип, 26 проценты ҡәнәғәтләнерлек түгел тип баһалай.

✓БР Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы бойороғо менән "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы коллективы мөрәжәғәтен тикшереү буйынса махсус комиссия төҙөлдө. Министр Борис Мелкоедов ҡайһы бер ҡөҫтәрҙең компанияла килеп тыуған хәлде ниндәйҙер милли ерлеккә бәйләргә тырышыуы ерлекһеҙ икәнен дәлилләне.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһы Өфөгә ихаталар биләмәһендә юлдар төҙөүгә һәм ремонтлауға 795 млн һум аҡса бүленәсәген хәбәр итте. Финанс ярҙамы партияның "Рәсәйҙең яңы юлдары" проекты сиктәрендә күрһәтеләсәк. Өфөлә юлдар төҙөү һәм ремонтлау башлыса муниципаль һәм төбәк бюджетынан бүленә, ә бына ул аҡсалар ихаталарҙы төҙөкләндереүгә һәр саҡ етмәй ҡала. Шуға ла "Берҙәм Рәсәй" партияһы аҡсаһы бына шул ҡул етмәгән өлкәгә йүнәлдерелә лә инде.

✓23-24 апрелдә 32-се мәктәптең спорт залында спорт бейеүҙәре буйынса баш ҡала мэры кубогына ярыштар үтәсәк. Белешмәләр өсөн телефон: 273-38-43.

ҺӨЙӨНСӨ!

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫ ТАРИХЫНА...

## тағы бер бит өҫтәлде




**Ошо көндәрҙә башҡорт йәмәғәтселегеә ҙур ҡыуаныс кисерҙе - ете томдан торасаҡ "Башҡорт халҡы тарихы"ның бишенсе томы донъя күрҙе.**

2009 йылда был серияның беренсе томын ҡулға алыу бәхетенә өлгәшкәйнек инде. Ни өсөн башҡалары нәшер ителмәйенсә, тап бишенсеһе алдараҡ донъя күрҙе һуң? Ул Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүгә - 20, исеме донъя кимәлендә танылыу тапҡан бөйөк башҡорт ғалимы Әхмәт Зәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арнап сығарылған. Әммә башҡаларын да оҙаҡ көтөргә тура килмәҫ, моғайын. Быйыл, Алла бойорһа, 3,4, 6-сы томдарҙы нәшер итеү планлаштырыла, киләһе йылға инде 2-се һәм 7-се том донъя күрәсәк.

Исем туйын үткәргән бишенсе томға килгәндә, ул халҡыбыҙ тарихының 1900- 1940 йылдар осорон үҙ эсенә ала. Ысынлап та, был башҡорттар тарихындағы үҙенсәлекле һынылыш ваҡыты була: XX быуаттың тәүге дүрт тиҫтә йылындағы революциялары һәм һуғыштары, емереклектәр, социалистик йәмғиәт төҙөү бығa тиклем һәүетемсә үҙенең ғәҙәти ҡоролошо менән йәшәп килгән башҡорттоң тормошона үҙ мөһөрөн баҫа. Шулай булыуға, хатта большевиктарҙың социаль тәжрибәләренә һәм ҡырҡа цивилизация үҙгәрештәренә ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы йәшәүгә ынтылышын, бөтмәҫ энергияһын, юғары яраҡлашыу мөмкинлеген һәм ижади һәләтен иҫбат итә. Был ғына ла түгел, бөгөн Рәсәй сәйәсмәндәре һәм ғалимдары билдәләгәнсә, Башҡортостан илдә беренсе булып федерализмға нигеҙ һала, үҙ дәүләтселеген булдыра.

Китапта Башҡортостан, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ырымбур, Силәбе һәм башҡа төбәктәрҙең архивтарынан һуңғы йылдарҙа алынған материалдар менән бергә быға сиклө билдәле фәнни әҙәбиәткә һәм документаль материалдарға, Америка, Англия, Германия, Төркиә, Венгрия һ.б. тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәренә таянып, комплекслы ҡараш аша башҡорт халҡының һынылышлы осорҙан сығыу юлдарын тапҡанлығын, этник һәм сәйәси берләшеү өсөн ҡайҙан көс алғанлығын, ни өсөн уның өмөттәре аҡланмағанлығын, Башҡорт автономияһының башында кем тороуын, һ.б. күрһәтеү маҡсат итеп ҡуйыла. Шулай уҡ миллләттең Бөйөк Октябрь революцияһына тиклемге һәм унан һуң ялаған ҡаҙаныштары менән бер рәттән, яңы цивилизация баҫҡысына күтәрелеү өсөн нindәй хаҡ түләүе лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Ғөмүмән, "Башҡорт халҡы тарихы" китабының бишенсе томы республика ғына түгел, ватан тарихын өйрәнеүгә үҙенең өлөшөн индерәсәк фундаменталь хеҙмәт булып донъя күрҙе.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Марат Ҡолшәрипов, "Башҡорт халҡы тарихы" серияһының ғилми етәксеһе һәм баш мөхәррире:** Бишенсе томдың яңылығы шунда: ул XX быуаттың тәүге 40 йылында башҡорттарҙың тарихын комплекслы, фәнни-фундаменталь тикшергән тәүге баҫма булып тора. Унда башҡорт йәмғиәте тарихының бик күп аспекттары: демография, социаль-иҡтисади тормош, автономия өсөн көрәш, башҡорттарҙың профессиональ мәҙәниәте формалашыуы, шулай уҡ беренсе тапҡыр Башҡортостандан ситтә, аныҡлап әйткәндә, Силәбе, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә, Пермь крайында һәм Татарстан Республикаһында йәшәүсе башҡорттар тарихы яңы ҡараштан сығып яҡтыртыла һәм баһалана. Мәҫәлән, 1917 йылда башҡорттарҙың һаны 1 миллион 733 мең булһа, 1926 йылға тиклем ул 626 меңгә тиклем кәмей. Китапта бының сәбәптәре асыҡ күрһәтелгән. Икенсе миҫал: XX быуат башында башҡорттарҙың ярым күсмә тормош алып бармауы, ә күпселектә ултыраҡ тормош алып барыуы, бары тик урман-тау, көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарҙа йәйләүгә сығыу тәжрибәһе булыуы тураһында һығымта яһалды. Шулай уҡ был томда башҡорттарҙың Рус-япон һәм Беренсе донъя һуғыштарында ҡатнашыуына лайыҡлы иғтибар бирелә. Совет власын урынлаштырыу, беренсе большевистик үҙгәртеп ҡороуҙар осоронон ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла тейешенсә баһалана. Ғөмүмән, китапты әҙерләүсе ижади коллектив үҙенә ҡушылған бурысты атҡарып сыҡты тип иҫәпләйем һәм был китап барлыҡ йәһәттән дә ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле ғилми тикшеренеү хеҙмәте булып тора, тип ышаныслы әйтә алам.

**Дияс ЙӘНТҮРИН, авторҙар коллективы ағзаһы, тарих фәндәре докторы:** Был китаптың үҙенсәлеге шунда: беҙ, авторҙар коллективы, XX быуатҡа миллион ярым булып инеп, 20-се йылдарҙың уртаһында 600 меңгә ҡалған ҙур этностың ауыр йылдарын яҡтыртырға, фәндең бөгөнгө көн күҙлегенән методологияһын, исулдарын яңынан ҡулланып, анализ яһап, ҡатмарлы осорҙо объектив рәүештә асыҡларға, мәсьәләләрҙе фәнни нигеҙләргә тырыштыҡ. Әлбиттә, был беҙҙең республика өсөн, башҡорт халҡы өсөн ҙур бер фундаменталь эш һәм уны, сит илдәр авторҙары йәлеп ителһә лә, нигеҙҙә милли кадрҙар милли күҙлектән сығып әҙерләне. Мөмкин булған тиклем тарихтың "аҡ тап"тарын тәҙәтергә тырыштыҡ. Башҡорт халҡы күсмә халыҡ булған, уның әҙәбиәте булмаған, яҙмаһы булмаған, тигән ҡараш бөгөнгәсә йәшәне. Бер генә миҫал: 1919 йылда Рәсәйҙә наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәш асып, ликбездар ойоштороғандар, шунда башҡорт халҡы наҙан булып күренә. Ни өсөн? Уйлап ҡараһаң, һәр ауылда бер-ике мәҙрәсә булған, башҡорттарҙың балалары ла, оло лары ла ғәрәп шрифтында уҡыған. Уларҙың телен, яҙмаһын юҡҡа сығарҙылар ҙа, тәүҙә латинсаға, аҙаҡ кириллицаға күсерҙеләр. Һөҙөмтәлә мосолман халҡы барыһы ла наҙан булып килеп сыҡты. "Урал батыр" эпосынан башлап бик бай әҙәби мираҫы, алдынғы интеллигенцияһы булған милләт наҙан була аламы? Был томда шундай мәлдәргә, уларҙы дөрөҫләүгә, хата фекерҙәрҙе тәҙәтеүгә ныҡлы иғтибар иттек. Китапты ҡулға алғас, ышаныслы итеп, уны башҡорт халҡы өсөн генә түгел, башҡорт халҡы тураһында башҡа сығанаҡтарҙан ғына уҡып белгән, ҡайһы берҙә яңылыш фекер йөрөткән башҡа халыҡтар өсөн дә әһәмиәтле, тип әйтергә була.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.

ҺОРАУ - ЯУАП

### ЧЕК ҠАҒЫҘЫН ҺАҠЛАҒЫҘ

**Закон ға ярашлы, тауарҙы кире ҡайтарырға тура килгән саҡта чек ҡағыҙын күрһәтеү мотлаҡ түгел, шулай ҙа тәжрибәләрҙән күренеүенсә, уны барыбер һаҡлап тотоу кәрәк, ти эксперттар. Ҡулланыусы хоҡуғын яҡлаусы йәмғиәттәргә ярҙам һорап һыйылған иң күп ғаризалар тап ана шул чек ҡағыҙын һаҡламаған кешеләрҙән килә икән. Ә шулай ҙа тауарҙы ҡайҙа һатып алыу фактын уның тышлығына һуғылған штрих-код йә булмаһа шаһиттар ярҙамында иҫбатларға була.**

Иң яҡшыһы, әлбиттә, ҡулында чегың булыуы. Техника тәрҙәренә, аяҡ кейеме һәм өҫ кейеменә чекты ике йыл буйы һаҡларға кәрәк. Гарантия срогы үтеп киткән хәлдә лә, әгәр чек ҡағыҙы булһа, ике йыл эсендә тауар сифатына дәғүә белдерә алаһығыҙ (25-се статья). Тик бындай осраҡтарҙа һис кенә лә һүҙ көрәштереп, әрләшеп тороу ярамай. Директор исеменә дәғүә яҙыу көслөрәк тәьҫир яһай. Уны ике данала яҙырға кәрәк, береһен магазинда ҡалдырһағыҙ, икенсеһе үҙегеҙҙә ҡалһын. Документтарҙың ике данаһында ла уны ҡабул итеү көнө һәм ҡабул итеп алған кешенең ҡултамғаһы ҡуйылырға тейеш.

Сауҙа ойошмаһы дәғүәне ҡабул итеп алғандан һуң 10 көн эсендә яуап бирергә тейеш. Әгәр яуап алмаһағыҙ, 11-се көнөндә үк судҡа бара алаһығыҙ.

Намыҫһыҙ һатыусыны "урынына ҡуйыу" өсөн тәҡдимдәр йәки ялыу кенәгәһенә яҙыуҙың бер файҙаһы ла булмаясаҡ. Күпселек предприятиеларҙа ул бер нисә данала эшләнгән: береһе ҡулланыусы ҡулына бирелһә, күҙәтеү органдары иғтибары өсөн бөтөнләй икенсе кенәгә тотола.

### ЯЛЫУ ЯҘЫУ

Әгәр һеҙ компенсация алып ҡына ҡалмайынса, алдаҡсы һатыусыларҙы "аҡылға ултыртырға" теләһәгеҙ, судҡа юллау ғаризаһы менән бергә Роспотребнадзорға ялыу яҙырға кәңәш бирә хоҡуҡ яҡлаусылар. Күҙәтеүсе ведомство магазинға компенсация түләүҙе йөкмәтә алмай, шулай ҙа закон боҙоусыларҙы күнелләнән булмаған тикшереүҙәр көтәсәк. Бынан тыш, сауҙа ойошмаһы дәүләткә 500 һумдан алып 5 меңгә тиклем штраф түләүгә тарттырыласаҡ. Ә тикшереү барышында тупланған мәғлүмәттәрҙең суд барышында кәрәге тейеүе ихтимал: ул һеҙҙең хаҡлы икәнде раҫлаусы тағы бер аргумент буласаҡ.

### СУД АҠСАНЫ ҠАЙТАРАСАҠ

Зыянды фәҡәт суд аша ғына ҡайтартып була, ти эксперт. Рәсәйҙә ҡулланыусы зыян күргән өсөн күпләп компенсация түләтеү тәжрибәһе булмаһа ла, суд, ғәҙәттә, алданған ҡулланыусы мәнфәғәтен яҡлай.

Суд ҡарары тауарҙы кире ҡайтарып бирергә йәки уны икенсеһенә алыштырырға һәм хатта аҙ булһа ла компенсация алырға ла ярҙам итәсәк.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Туберкулез



Йүкә балы - 100 грамм, тоҙланмаған аҡ йәки һары май - 100 грамм, алоэ һуты - 115 грамм, какао порошогы - 50 грамм. Дауа өсөн алоэның япрағын ҡырҡып алырҙан алда уға ике аҙна һыу һипмәҫкә. Эмаль һауытта майҙы иретқәс (ҡайнатмаҫҡа), ул йылы сағында бал, какао порошогы, алоэ һуты ҡушып болғатырға һәм быяла һауытҡа һалып, һыуыҡтыста һаҡларға. Оҙайлы ваҡыт ҡулланырға. Иртәле-кисле 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан эҫе һөткә болғатып эсергә.

### Күгәргән, бешкән урындар

Башлы һуғанды ҡырғыстан үткәреп, күгәргән урындарға компресс итеп ябып торһаң, файҙаһы ҙур. Бигерәк тә тубыктағы яраларҙы яҡшы төҙәлтә. Әрем, һары мәтрүшкә, юл япрағы үләндәренән эшләп ҡуйылған майҙар ҙа файҙалы.

Бешкән урынды ҡаты итеп бешерелгән, һөҙөлгән һәм 13-15 градус йылылыҡҡа тиклем һыуытылған сәй менән сайҡағыҙ. Яраны стериль бинт менән бәйләгәс тә уға киберге ирек бирмәй, ошо сәй менән еүешләп тороғоҙ. Көн һайын яңы бешерелгән сәй менән ошо процедураны ҡабатларға. Бешкән урындарға шулай уҡ гөлиемеш, һары мәтрүшкә майҙарынан яһалған компресс килешә.

### Тонусты күтәреү

Бының өсөн иртән һәм төш ваҡытында 15 тамсы элеутерококк төнәтмәһен һыуға тамыҙып эсергә. Шулай уҡ женьшень, заманиха, левзея, алтын тамыр (родиола розовая) төнәтмәләренең береһен һайлап ҡулланырға була. Уларҙың барыһы ла тәндең тәрлө ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығын арттыра. Тик был төнәтмәләрҙе төнгөләккә эсергә ярамай.

### Йоҡоһоҙлоҡ һәм нервылар ҡуҙғып йонсотҡанда

2-шәр балғалаҡ бөтнөк үләне япрағын, трифоль үләнен йәки 1-әр балғалаҡ бесәй үләне тамыры менән ҡатнаштырырға. 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп төнәтергә, һөҙөргә. 10 көн дауамында иртәнсәк һәм кискеһен яртышар стакан эсергә. 20 көн үткәс тағы ла ҡабатларға.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

✓ *Кешеләрҙе айыҡлыҡҡа ҡурҡытып, тыйып, мәжбүр итеп өндәү түгел, ә аңлатып инандырыу. Эскегә бирелгән йә бирелеп өлгөрмәгән кешеләр инаныуҙары буйынса айыҡтар рәтенә баҫһын.*



"АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ

# АҢЫБЫҘҒА КИЛӘЙЕК, ТУҒАНДАР!

## Йәштәребеҙ оло афәт хаҡында саң ҡаға

**Бөгөнгө көндә бер кемде лә бер ниндәй мәғлүмәт менән дә аптыратырмын, тимә. Шаңҡытырҙай, һушты алырҙай хәбәрҙәргә лә беҙ тыныс, һәүетемсә ҡарарға өйрәндек, сөнки тормошобоҙға тамырҙарын тәрәнгә ебәреп өлгөргән яманлыҡ, әшәкелек, яуызлыҡ беҙгә хәҙер гәҙәти, көндәлек ығы-зығы булып тойола һәм уның иге лә, сиге лә күренмәй.**

"Һе, иҫең киткән икән, - тине бер танышым ягымлы йылмайып, - иҫерек милиционер урамда табель ҡоралы менән осраған берәүҙе атып йөрөгән. Шул да булдымы аптыраҡ!" Ә мин уны ысынлап та аптыратырға, хатта нәфрәтләндерергә теләп, ҡулымдағы гәзиттән һаман береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ факттарҙы һайлап уҡыйым. Бына, мәҫәлән, иҫерек әсәнең үҙ балаһын һыйҙырмай, урамға ҡыуып сығарыуы хаҡында мәҡәлә. Быға ла иҫе китмәне әңгәмәләштең. Миңә мәғәнәле ҡарап, тамаҡ төбөн сирткеләне генә. Иҫереккә бала ҡәҙерлерәкме, әллә араҡымы - үҙең уйлап ҡара, йәнәһе. Туҡта әле, мәйтәм, барыбер аптыратам һине! Ғәмәлгә ҡалғандай, эргәмдә төрөп ҡуйылған плакат ята ине, шуны тағатып ебәрҙем дә иң тәүге һөйләмен ҡысҡырып уҡый башланым: "Ер шарында йәшәгән халыҡтарҙың 3/2 өлөшө алкоголь дә, тәмәке лә ҡулланмай. Донъяның 41 илендә "коро закон" буйынса йәшәйҙәр..." Күрәм, танышым миңә боролоборак ултырҙы. Артабан дауам итәм: "80 илдең халҡы тотошлайы менән айыҡ йәшәй, иҫереккә сит планетанан килеп төшкән ғибрәткә йә аҡылын юйған бәндәгә ҡараған кеүек мөнәсәбәттәләр. Ер йөҙөндә 700-ләп эре төркөм халыҡ айыҡ йәшәй. Ер шарының Төньяҡ Африканан (Марокко) алып Филиппинға тиклем урта өлөшө - айыҡ донъя. Ҡытай менән Һиндостан да шулар иҫәбенә инә. Ҡытайҙа йән башына алкоголь ҡулланыу кимәле йылына ни бары 50 грамм (!) тәшкил итә. Рәсәйҙә иһә бөгөн был күрһәткес 18-20 литрға барып етә..."

Ошо һандарҙы уҡығас, танышымдың, ниһайәт, күҙҙәре аҡайҙы, ул миңә яҡыныраҡ шылып ултырып, быңдай ғибрәтле мәғлүмәтте ҡайҙан уҡыуым менән ҡыҙыҡһынды. Шунан улай итте, былай итте лә, иплән кенә ҡулымдан плакатымды тартты ла алды. "Гәфү ит, һеңлем, бир инде зинһар миңә был материалды. Һин быңдағы кеше, табыһың әле, ә мин уны ауылыма алып ҡайтып, билдәһи, магазин ишегенә йәбештереп ҡуям", - тип үтенде. Хәҙер инде мин "позаға" баҫтым. "Һе, ошоноң менән һин ауылдаштарыңды эсеүҙән туҡтатырмын тип уйлайһыңмы инде?" - тим иҫ китмәгән төҫ менән. "Улай тимә әле, һеңлекәш, - ти танышым ялбарыулы итеп, - тәҡәтте ҡоротто бит был эскеселәр, хет ауылды ташлап ҡас, чистый бәләгә әүерелделәр. Күҙҙәренә әләгә күрмә - араҡы, аҡса теләнселәйҙәр, һуғышалар, ғаиләләрен рәнйетәләр, урамда аунап яталар... Әле кешелектән сығып бөтмәгән берәүһе, исмаһам, ошоно уҡып аңына килһә лә ҙур файҙа булыр ине", - тип һөйләнә-һөйләнә минең әлеге плакатты ҡәҙерләп кенә гәзиткә төрөп, сумкаһына һалып алды. Осраҡлы танышым менән беҙ Сибай поезын көтә инек. Ул ҡайтып бара, ә мин үткән шәмбе көн булған "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыусылар семинарына килгән әхирәтемде оҙатам. "Бына бит, егеттәрҙең һүҙе раҫҡа сыға: уларҙың эше бер кешене ҡотҡарһа ла ҙур файҙа", - тине әхирәтем семинарҙа яңғыраған фекерҙе хәтергә төшөрөп.

Эйе, тап шулай тигәйне бит Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Фәнзил Әхмәтшин әлеге йыйынды асҡан инеш һүҙендә.

- Был ғәмәлдә үҙ йөрәгең аша үткәреп башҡарыу ғына һөҙөмтә бирер, сөнки ул битарафтар эше түгел. Ул отчет биреү өсөн эшләнмәй, чиновниктар ярышы түгел был, шуға күрә лә беҙ аңлы рәүештә административ ресурстарҙы йәлеп итмәнек ошо эшкә. Фәҡәт халыҡ араһында, уның хәл-әхүәлен көн дә күреп, белеп йәшәгән активистарыбыҙ ярҙамына иҫәп тотабыҙ. Аптырағандан, йөрәк әрнегәндән тотондоҡ беҙ был сараға. Исмаһам, бер генә кешене айыҡ юлға баҫтыра алһаҡ та, был алға табан ҙур аҙым буласаҡ. Эскелек - харам, ул беҙҙең халыҡҡа тәү түгел. Ошоно аңламай тороп, эш бармаясаҡ!

Алда әйтеп кителеүенсә, 9 апрель Өфөләге Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Айыҡ ауыл-2001" конкурсында ҡатнашыусы ауылдарҙың хакимиәт башлыҡтары һәм активистары семинарға йыйылды. Гәзит уҡыусыбыҙ хәбәрҙар: "Айыҡ ауыл" конкурсы хаҡында беҙ гәзиттең һәр һанында мәғлүмәт бирә барҙыҡ. Был сара Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, "Айыҡ Башҡортостан" республика йәмәғәт ойошмаһы башланғысы менән БР Һаулыҡ һаҡлау, Элемтә һәм киң мәғлүмәт саралары, Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министрлыҡтары ҡатнашлығында ойошторола.

Семинар тигән төшөнсә ни өсөндөр рәсмилекте, һалҡынлыҡты, ялҡытҡыс докладтарҙы күҙ алдына баҫтыра. Ә бына "Айыҡ ауыл" конкурсы буйынса үткәрелгән был кәңәшмә үҙенең кешелекле йөҙө менән айырылып торҙо. Унда рәсмилектең эҙе лә булманы, сөнки, бәхеткә күрә, айыҡлыҡ хәрәкәтен етәкләүсе егеттәрҙең бөтәһе лә - йәштәр, өҫтәүенә, бөтәһе лә белемле, юғары мәҙәниәтле һәм айыҡ тормош алып барыусылар. Тап шуға күрә лә, йәш кенә булыуҙарына ҡарамаҫтан, кәңәшмәгә килгән ауыл хакимиәте башлыҡтарына "Эште иң тәүҙә үҙегеҙҙән башлағыҙ", тип әйтергә уларҙың әхлаҡи хоҡуҡтары бар ине. Ысынлап та, эскелек менән көрәшеү өсөн иң тәүҙә үҙеңә айыҡ аҡыл менән йәшәү фарыз. Юғиһә, беҙҙең көнкүрештә йыш ҡына байрамдарҙа, туйҙарҙа, тыуған көндәрендә бер аҙ "һалып алыу"ҙан баш тартмаусылар ҙа ни өсөндөр айыҡ йәшәүселәр рәтендә йөрөй. Был, йәнәһе, "мәҙәниәтле" эсеү тип атала. Ә был иһә бюджет тишеген ямау өсөн алкоголле эсемлектәр һатыуҙы арттырыу буйынса Хрущев заманынан килгән тоҙаҡ ул. Кәңәшмәнең иң тәүге һәм мөһим һабағы, бәлки, тап бына ошо талаптыр ҙа.

Икенсе һабаҡ - ул кешеләрҙе айыҡлыҡҡа ҡурҡытып, тыйып, мәжбүр итеп өндәү түгел, ә аңлатып инандырыу. Эскегә бирелгән йә бирелеп өлгөрмәгән кешеләр инаныуҙары буйынса айыҡтар рәтенә баҫһын. Конкурста ҡатнашыусы ауылдарҙың вәкилдәре бына ошо ике йүнәлеш буйынса эшләргә тейеш тә инде.

Тотошлайы менән эсмәгән айыҡ илдәр, ауылдар бар тигәнгә балаларса бер ҡатлылыҡ менән ғәжәпләнгән вокзалдағы ағайҙың йөҙө күҙ алдынан китмәй. Ғәжәп хәл, әлбиттә, ләкин бит ҡасандыр Башҡортостаныбыҙ шулай уҡ тотошлайы менән айыҡ ил булған - был бер ҙә ғәжәп түгел. Ҡымыҙ, буҙа, айран эскәндәр, араҡының ни икәнен дә белмәгәндәр. Әйткәндәй, беҙҙең бит боронда килгән ауыҙ-тел ижады өлгөләрендә лә был темаға, исмаһам, ишара ла юҡ, сөнки булмаған



Бына улар, айыҡлыҡҡа юл башлаусылар.

*✓ Районда иғлан ителгән "Айыҡ Әлшәй" конкурсында 104 ауылдың барыһы ла ҡатнаша. Бынан тыш, Әлшәйҙә байрамдарға һәм ял көндәренә бай булған май айына арнап, "Айыҡ май" акцияһы ойоштороласаҡ.*



борон ундай ғәҙәт! Дөрөҫ, бәғзе бер башҡа халыҡ әкиәттәре: "Ул туйҙа беҙ ҙә булдыҡ, бал эстек, тик ул һаҡал-мыйыҡты ғына сылатты" тигәнерәк юлдар менән бөтә бөтөүгә...

Әлхәмдулиллаһ, асылыбыҙға ҡайтырға насип итһен. Был изге юлда тәүге матур эштәр башланып тора. Бөтә халҡы менән бер булып, айыҡ йәшәү рәүешен һайлаған ауылдарыбыҙ бар хәҙер. Был йәһәттән әбйәлилдәр башланғысын телгә алып китмәү мөмкин түгел. Гәзитебеҙ был хаҡта яҙып та сыҡҡайны инде.

- Беҙҙе был кәңәшмәгә йыйып, йәштәребеҙ бик дөрөҫ эшләне, - тип сараны ойоштороусыларға рәхмәтен белдерҙе семинарҙа һүҙ алып һөйләүсе Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы Мәүҙигә Баймөхәмәтова. - Мин 33 йыл уҡытыусы булып эшләнем, әсәй кешемен. 20 йыл ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булдым, әле бына 5 йыл ауыл хакимиәтен етәкләйем. Шуға күрә лә мин халҡыбыҙ өсөн эскелектең ни тиклем ҙур афәт икәнлеген яҡшы аңлайым, ошо арҡала тыуған әрнеүҙәрҙе йөрәгем аша үткәреп, хакимиәт башлығы булып эшкә килеүемдең тәүге көнөн үк эскелеккә ҡаршы көрәш саралары менән башлап ебәрҙем. Был эшкә ҡатын-ҡыҙҙар советын, аҡһаҡалдар ҡорон, йәштәр эштәре буйынса белгестәрҙе, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен, пенсионерҙар советы ағзаларын, старостаны йәлеп иттем. Мин эшләй башлағанда ауылда 17 ҡатын эсә ине, бөгөн уларҙың береһе лә эсмәй. Был турала ғорурлыҡ менән белдерәм. Ошо ҡатындарҙың бөтәһе лә бөгөн матур итеп донъя көтә. Беҙҙең ауыл биләмәһендә эскегә бәйле бер генә суицид та юҡ, Аллаға шөкөр. Ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителеүселәр ҙә юҡ. Йәштәр матур ғаилә ҡороп йәшәйҙәр, айырылыусылар шулай уҡ юҡ. Проблемалар шулай ҙа етерлек: эсеүсе буйҙаҡ ирҙәр бигерәк борсой беҙҙе. Ғаиләләре юҡ. Улар менән эш алып барабыҙ, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрер тип өмөт итәм. Бында әле бик дөрөҫ әйтелде: башҡалар айыҡ тормош алып барһын өсөн иң тәүҙә етәксе кеше үҙе эсмәҫкә тейеш! Шунда ғына ул башҡаларҙан да ошоно талап итә ала.

- "Айыҡ ауыл" конкурсын беҙең Йәнтеш ауылы халҡы ла берҙәм хуплап, уға ҡушылырға ҡарар итте, - тип һөйләй Хәйбулла районы Атингән ауыл советы депутаты Рәйсә Ғәбделмәнова. - Матур, эшсән халыҡ йәшәй беҙҙә, ауылыбыҙ йәмле, төҙөк. 2009 йылда ике ҡатлы мәктәп һалынды, клубҡа евроремонт үткәрелде. Йәштәребеҙ үҙ көстәре менән ағас әҙерләп, хоккей майҙаны төҙөп ҡуйҙы. Хәҙер ярыштарҙа ҡатнашып, тәүге еңеүҙәр яулай башланылар. Үҙ йолаларыбыҙ бар. Мәҫәлән, ауыл уртаһындағы Тәкәл тауында туй йолаһы үткәрәбеҙ.

- Плакаттар элеп ҡуйып ҡына эскелеккә ҡаршы көрәшеп булмай, - тине Көйөргәҙе районы Яҡшембәт ауыл хакимиәте башлығы Рәүеф Абдуллин. - Һәр ваҡыт кеше араһында булырға, халыҡ менән бергә йәшәргә кәрәк. Мөмкинлектәребеҙҙе барлағандан һуң, беҙ ҙә "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға булдыҡ. Беҙҙә бының өсөн ерлек бар: тотороҡло хужалыҡ, халыҡ тырышып эшләй, сөнки беҙҙә элекке "Искра" колхозы нигеҙе һаҡлап алып ҡалынды. Һауынсыларыбыҙ, механизаторҙарыбыҙ, малсыларыбыҙ малсылыҡ, ер эше - иген үҫтереү, һөт етештереү менән шөғөлләнә. Ауылыбыҙ сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтыла, мәсеттә никах йолалары үткәрелә.

Ошо йыйында сығыш яһаусы Стәрлебаш, Борай, Архангел һәм башҡа районлар вәкилдәренең дә һүҙе бер булды: халыҡ был изге башланғысты берҙәм хуплай һәм уға ҡушылырға ҡарар иткән!

Эйе, "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыу өсөн 42 райондың 97 ауылынан ғариза килде. Конкурсты үткәреү буйынса ойошторолған йыйында ошо ауылдар вәкилдәре алдына аныҡ бурыстар ҡуйылды. Улар ауыл халҡын, айырыуса балаларҙы, йәштәрҙе эскелек афәтенән һаҡлап ҡалыу саралары күрергә тейеш. Атап әйткәндә, ауыл активистары айыҡлыҡты пропагандаларға һәм урындағы халыҡты алкоголь ҡулланыуҙың фажиғәле эҙемтәләргә килтереүен дәлилләүсе мәғлүмәттәр менән таныштыра барырға; урындарҙа алкоголле эсемлектәр менән сауҙа итеүҙе сикләү йәки тыйыу буйынса саралар күрергә; алкоголь һәм тәмәкене рекламалауҙы тыйыу; закондар сығарыу һәм башҡарма власть органдарына йәмғиәтте алкоголь һәм наркотик менән ағыулауға ҡаршы йүнәлдерелгән закон акттары, ҡарарҙар сығарыу, урындарҙағы үҙидара органдары ҡарарҙарын сығарыу буйынса башланғыс күрһәтеү, айыҡлыҡ өсөн көрәшеүсе башҡа ауылдар активы, дәүләт, йәмәғәт ойошмалары менән берлектә эшләү, тәжрибә уртаҡлашыу кеүек аныҡ эштәр менән шөғөлләнергә бурыслы.

Конкурс шарттарында төрлө номинациялар ҙа ҡаралған. Әлегә сер итеп кенә әйткәндә, конкурсты ойоштороусылар еңеүсе ауылды спорт комплексы менән бүләкләргә вәғәҙә итә. Эйе, бүләктәр ҙә, баһа ла булыр, ләкин шуны иҫтән сығарырға ярамай: был эш бүләк өсөн түгел, ә аныҡ һөҙөмтә булһын өсөн башҡарылырға тейеш. Абруйлы, объектив жюри ауылдар буйлап эш барышын тикшереүгә сыҡҡанда урында асыҡланасаҡ: отчет өсөн генә "ярыша"мы бәғзеләр, әллә ауылдаштарын наркотикка тиң араҡы үлемесенән йолоп алып ҡалыу хаҡынамы?

...Тарихыбыҙҙан мәғлүм: борон-борондан илебеҙгә баҫып инеп, еребеҙҙе тартып алып, халҡыбыҙҙы ҡол итеп, юҡҡа сығарырға ынтылыштар булып торған. Тик халҡыбыҙ бирешмәгән, еңелмәгән, сөнки ул рухы менән ҡеүәтле булған. Хәҙер иһә ана шул рухты үлтереү өсөн эш бара: халыҡты эсереп, миңрәүләндереү. Ихтыярһыҙҙар, көсһөҙҙәр, бахырҙар ана шул тоҙаҡҡа килеп эләгә тора, упҡынға оса тора. Аңыбыҙға киләйек, туғандар! Ошо хаҡта саң һуғыла, саң! Ошо мәлдә хәл иткес һүҙҙе аҡһаҡалдар әйтергә тейеш ине, ләкин был бурысты йәштәребеҙҙең үҙ иңенә алыуы икеләтә маҡтаулы: тимәк, быуындар сылбырының бер өлөшөндә мәкергә, шайтан һыуына ҡаршы иммунитет йәшәй, тимәк, афәткә ҡаршы торорҙай йәш көстәрҙең еңеүгә өмөтө бар. Хәйерле сәғәттә!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Айыҡ ауыл - 2011" конкурсында ҡатнашыусы ауыл һәм биләмәләр вәкилдәре ошо конкурсты үткәреүҙе һәм уның положениеһын, шарттарын бер тауыштан хупланы һәм уға дәррәү ҡушылыуҙары тураһында белдерҙе. Йыйын һуңында улар Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовҡа, БР Хөкүмәтенә, республика министрлыҡтарына, муниципаль районлар хакимиәттәренә "Айыҡ ауыл - 2011" конкурсын үткәреүгә булышлыҡ итеүҙәрен һорап Мөрәжәғәт ҡабул итте. Беҙ, урындағы власть вәкилдәре, ошо конкурсты берҙәм хуплап һәм уға ҡушылып, ауылдарыбыҙҙа кисекмәҫтән алкоголгә ҡаршы сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса эш башлаясаҡбыҙ, тиелә Мөрәжәғәттә. Ләкин ауыл активистары көсө менән генә алкоголле эсемлектәр һатыуҙы һәм уны рекламалауҙы сикләүгә өлгәшеүе ҡатмарлы. Ә алда - байрамдар сылбыры, шуға күрә лә уларҙы эскеһеҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ, матур һәм күңелле итеп үткәреү буйынса кисектергеһеҙ саралар күреүҙе һорай конкурс активистары. Атап әйткәндә, 1 Май, Еңеү көнө, һуңғы ҡыңғырау һәм сығарылыш тантаналарында, Йәштәр көнө, Ҡала көнө һәм 1 сентябрь - Белем көнөндә алкоголь эсемлектәр, шул иҫәптән һыра һатыуҙы тулыһынса тыйыу буйынса күрһәтмә биреү кәрәк, тип әйтелә Мөрәжәғәттә. Шул уҡ ваҡытта дәүләт һәм муниципаль власть органдары бинаһары эсендә, мәғариф, мәҙәниәт, спорт-һауыҡтырыу учреждениеларынан 500 метр алыҫлыҡта алкоголь эсемлектәр һатыуҙы тыйырға, тигән күрһәтмә сығарыуҙы талап итә делегаттар.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Линиза СӘҒӘҘИЕВА, Әбйәлил районы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге етәксеһе, район ҡатын-ҡыҙҙары советы рәйесе:** Әбйәлилдең Һәйетҡол ауылы бар республикаға айыҡ ауыл булараҡ билдәле. Ул ваҡытта был эште ҡатын-ҡыҙҙар советы башлап ебәргәйне, сөнки ҡатын-ҡыҙ ғаилә усағын һаҡлаусы булараҡ, ғаиләһенең, балаларының киләсәге өсөн йышыраҡ борсола, уларҙы нисек тәрбиәләйем, тип уйлай. Тормоштоң иң ауыр яҡтары ла иң тәүҙә ҡатын һәм әсә булған кешегә билдәле була, йәмғиәттәге насар күренештәр ғаиләһенә тәьҫир итә. Ағинәйҙәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзаларының, халыҡ араһында күп йөрөгән, клуб мөдире булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан сәсәниә Вәсилә апай Садиҡоваларҙың был эшен район ҡатын-ҡыҙҙар советы ла хуплап сыҡты. Һәйетҡолдарға йәлап Ишкилде ауылы ла ҡушылды. Был конкурста Ҡырҙас һәм Әхмәт ауылдары ҡатнашасаҡ.

Ғөмүмән, районда эскелек "сәскә атҡан" ваҡыттар бер ҡасан да булманы, сөнки беҙ элек-электән халҡыбыҙ йолалары менән йәшәйбеҙ. Буҙа, ҡымыҙ кеүек милли эсемлектәрҙән өҙөлмәгән өҫтәлебеҙҙә спиртлы эсемлектәргә урын юҡ. Әлбиттә, 80-се йылдар аҙағында - 90-сы йылдар башында асылыбыҙҙан бер аҙ тайпылыбыраҡ киттек, эскелек тә булып алды, шулай ҙа халыҡтың аңында һәр ваҡыт айыҡ, матур, йолалы тормош йәшәп килде. Шуға ла ҡатын-ҡыҙҙар советтары менән берлектә был йоланы тергеҙеү бурысы тора алдыбыҙҙа.

**Фуат МӘХМҮТОВ, Буранғол ауыл биләмәһе башлығы, Әбйәлил районы:** Айыҡ йәшәү рәүешенә саҡырыу, республика кимәлендә бындай конкурс үткәреү һәйбәт, тик ул ваҡытлы бер кампания булып ҡалмаһын ине. Ниәт иткән маҡсаттар тормошҡа ашһын өсөн хөкүмәт яғынан да ярҙам кәрәк, йәғни закондар ҡатыраҡ булһын ине. Әйтәйек, һыра һаман алкоголле эсемлектәр исемлегендә түгел, одеколон һатмау буйынса ла ҡарарҙар кәрәк. Самогон һатҡан кешеләргә ҡарата протокол төҙөү ҡатмарлы процесс, уларҙы ниндәйҙер яуаплыҡҡа тарттырғанда яҡшы булыр ине.

Эш урыны булдырмайынса эскелектән ҡотолоп булмай, тигән ҡараш менән килешмәйем. Миненсә, колхоздар мәлендә эскелек нығыраҡ таралғайны, сөнки ул ваҡытта урлап һатыу мөмкинлеге күп ине. Бөгөнгө көндә шәхси эшҡыуарлыҡ эскелеккә ҡаршы көрәштең бер ысулы тип уйлайым. Эшҡыуарҙар араһында үҙ магазинында спиртлы эсемлектәр, һыра һатыусылар ҙа бар бит, тиеүселәр булыр. Эйе, уларҙың бындай хоҡуғы бар. Бер ваҡыт тыйырға маташып ҡарағайныҡ та, әммә закон буйынса был тыйылмаған, хатта көс структуралары ла беҙгә ярҙамға килә алмай. Бына шуның өсөн дә закондарҙың ҡатыланыуы шарт. Халыҡ араһында динде лә көсәйтергә кәрәк. Мәҫәлән, ауыл биләмәһендә булған Буранғол мәсетенә кеше күпләп йөрөй, йәштәр ҙә тартыла, улар араһында дини белем биреүсе уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр бар. Улар белем алып кире ауылға ҡайтһа, халыҡ үҙенең электән килгән айыҡ йәшәү рәүешенә, асылына әйләнеп ҡайтыр һәм күп бәләләрҙән ҡотолор ине, тигән өмөттәмен.

**Дауыт ШӘКҮРОВ, Ҡармыш ауыл советы, Әлшәй районы:** Районлың ете ауылы конкурста ҡатнашырға ғариза бирҙе. Ә районда иғлан ителгән "Айыҡ Әлшәй" конкурсында 104 ауылдың барыһы ла ҡатнаша. Бынан тыш, Әлшәйҙә байрамдарға һәм ял көндәренә бай булған май айына арнап, "Айыҡ май" акцияһы ойоштороласаҡ. Был осор эсендә рейдтар буласаҡ, магазиндарҙа киске етенән һуң спиртлы эсемлектәр һатылыуы тикшереләсәк. Халыҡ бөгөн үҙе эскелектең яҡшыға алып бармаҫын аңлаған, унан ялҡып бөткән. Ә халыҡ үҙе тәҡдим итә икән, бындай конкурстар үткәреүҙең файҙаһы буласаҡ. Халыҡты нимәгәлер әйҙәү өсөн үҙең өлгө булырға тейешһең. Районда етәкселәр араһында эсеү, эскелек табындары ойоштороу күренеше юҡ, эскән кешене эш урынында ла оҙаҡ тотмайҙар, мәктәп, балалар баҡсалары коллективтары тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Һәр урынбаҫар, ауыл биләмәһе етәкселәре сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара, бер кем тәмәке тармай.

Ғөмүмән, 1990-2000 йылдар менән сағыштырғанда, Башҡортостанда бөгөн айыҡ тормош алып барыу ғәҙәткә инә. Әлбиттә, хроник эскеселәр бар, беҙҙең ауыл урамында ла 5-6 кеше даими эсеп йөрөй. Араҡы эсмә, ул бит зарарлы, тип кенә уларҙы тәрбиәләү һуң хәҙер. Йәштәрҙә айыҡ йәшәүгә дәрт уятырға кәрәк. Ауылда оло предприятиелар төҙөп булмай, әммә бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтерергә була. Кем эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләй, уларға документтар теркәү менән ярҙам итәбеҙ. Ауылда эшһеҙлек юҡ бит ул, теләге булған кеше йүнен таба. Беҙ үҙ сиратыбыҙҙа сабынлыҡтар менән ярҙам итергә тырышабыҙ. Бишәр һыйыр, һимертеп һуйыр өсөн бер нисә баш эре мал, ҡаҙ көтөүселәр бар. Хөкүмәт бит ул бер яҡтан, эсмә, тип бармаҡ янаһа ла, икенсе яҡтан спиртлы эсемлектәр һатып, ҙур аҡса эшләй, бюджетын тулыландыра. Ике яҡлы был бизмәндең ҡайһы яғын һайлайһың, үҙеңдән тора. Айыҡ тормошҡа халыҡ аңлы рәүештә килергә тейеш, шунһыҙ был афәтте туҡтатып булмаясаҡ.

**Нәзирә АХКАМОВА, район ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, Мәсетле районы:** Өс ауыл "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләк белдерҙе. Хәҙер инде беҙгә район хакимиәтенең терәге кәрәк, ә ҡатын-ҡыҙҙар советы һәр яҡлап ярҙам күрһәтәсәкбеҙ. Районда халыҡты айыҡ йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу йәһәтенән төрлө саралар уҙғарып торабыҙ. Мәҫәлән, һабантуйҙар ваҡытында айыҡ байрам - Мир ҡорбаны үткәрәбеҙ. Ул йыл һайын бер ауылда уҙа, тик ул йылда был ауылда һабантуй булмай, ул Мир ҡорбаны тип атала. Бында бөтә халыҡ көсө менән ҡорбан салына, аш бешерелә. Һабантуйҙағы кеүек уйындар уйнала, йыр-бейеү, уйын-көлкө була, әммә берәү ҙә эсеп йөрөмәй. Быйыл ул район үҙәге Оло Ыҡтамаҡта була. Әлеге конкурста ҡатнашыуыбыҙ ҙа айыҡ тормошҡа тағы бер аҙым. Әлбиттә, бер йыл эсендә эскелекте тамырынан йолҡоп ташлап булмаясаҡ, бының өсөн, бәлки, күп йылдар талап ителер. Шулай ҙа ниндәйҙер һөҙөмтә буласаҡ. Халыҡ ниндәйҙер проблемаһы булғанға, эшһеҙлектән эсә, тиһәләр ҙә, араларында сәбәпһеҙҙән эскәндәре лә бар. Шуға ла был конкурсҡа ҙур өмөттәр бағлайым.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

✓ Бына шулай ашай-ашай үҙебеҙҙе ризыҡтан май эшкәртеү "заводына", май "келәтенә" әйләндерәбеҙ. Кәрәкле энергияны алабыҙ ҙа, артығын май рәүешендә һаҡлауға һала барабыҙ.



**Кешене яралтҡас, Аллаһ Тәғәлә әҙәмгә хеҙмәт итһен тип өс ҡортто: ашатһын өсөн - бал ҡортон, кейендерһен өсөн - ебәк ҡортон, ауырыуҙарынан дауаланһын өсөн һөләк ҡортон бар иткән, тип әйтелә бер хәҙистә. Борондан билдәле булған, әммә ваҡыт үтеү менән онотола төшкән һөләк менән дауалау тураһында күберәк белергә теләп, Бөрйән районында йәшәүсе халыҡ медицинаһы белгесе, сәләмәт йәшәү рәүешен әүҙем пропагандалаусы Марат ИШМӨХӘМӘТОВҡа мөрәжәғәт иттек. Һөйләшеү барышында шулай уҡ үләндәр менән дауалау, дөрөҫ туҡланыу, сәләмәт, айыҡ тормош тураһында ла төплө фекерҙәр ишеттек.**

# РУХЫ ҺӘМ ТӘНЕ

## Һөләктөң кеше һаулығы өсөн әһәмиәте

Һөләк кешене ғәләм менән ялғаусы сара, тигән һығымтаға килгән ғалимдар. Һөләк ҡулланып, үҙенсәлекле тәжрибәләр үткәреп ҡарағас, уның әлегәсә беленмәгән күп кенә серҙәрен асыуға өлгәшкәндәр. Баҡтиһәң, 1834 йылдан алып һөләк ярҙамында төрлө тәжрибәләр үткәрелә икән. Был тәжрибә барышында һөләк аша кешеләргә төрлө сирҙәр йоҡторорға маташҡандар. Әммә һөләк организмындағы симбионттың ауырыу тыуҙырыусы һәр төрлө бактерияны зарарһыҙландырыуы асыҡланған. Шундай факт билдәле: һөләк үҙенә индерелгән һәр төрлө бактерияларҙы 3 минуттан алып 18 сәғәткә тиклемге ваҡыт эсендә үлтереп бөтә. Бөгөнгө көндә Санкт-Петербургта һөләктө өйрәнеү буйынса институт эшләй. Тимәк, һөләк менән дауалауҙың киләсәге өмөтлө һәм мәңгелек.

1346-1351 йылда бөтә донъяға холера сире таралғас, был афәт 75 миллионға яҡын кешенең ғүмерен өҙә. Тере ҡалған сирлеләрҙе һөләк ҡуйып ҡотҡара башлайҙар. Һөләк был яман сиргә вакцина кеүегерәк тәьҫир иткән. Әйткәндәй, һөләктө тикшереүсе ғалимдар йәш быуынға һөләк ҡуйыуҙы мотлаҡ үткәрелә торған сара булараҡ ғәмәлгә индереү тәҡдиме менән Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт иткән. Уларҙың дәлилдәрендә шундай факттар бар: һөләк ҡуйҙыртҡан кешеләр енәйәт ҡылып бармай, сөнки һөләк рухи сәләмәтлекте нығыта. Һөләк ҡуйҙыртҡан кешенең интеллект кимәле арта, иммунитеты нығый, хәтере яҡшыра. Уҡыусыларҙың белем үҙләштереүгә һәләте, өҫтәл артында ултыраҡлығы арта. Быны үҙҙәрендә һынап ҡараған ҡайһы бер студенттар имтихандар башланыр алдынан һөләк терапияһына йөрөй. Шулай итһәң, теүәл фәндәрҙән имтихан биреүе еңелерәк, ти улар. Шулай уҡ һөләк ҡуйғандан һуң түлһеҙ ҡатындар балаға уҙа. Ғөмүмән, енси ауырыуҙар менән ауырыған күп ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ирҙәргә һөләктөң ярҙамы баһалап бөткөһөҙ.

Ғалимдар асыҡлауынса, һөләктөң тәнгә ебәргән шыйыҡсаһы составында йөҙгә яҡын матдә бар. Шуларҙың 82-һенең кеше һаулығын нығытыуға булышлыҡ итеүен фән иҫбатлаған. Тағы ла бер үҙенсәлек - һөләк ҡандың сифатын яҡшырта, онкологик сирҙәрҙән профилактик сара булып тора, кешене ябыҡтырыуға һәләтле, ауранны таҙарта, төрлө им-томдан аралай. Элекке замандарҙа уҡ земство табибтары кешене сихырҙан, күҙ тейеүҙән дауалау өсөн үҙҙәре менән һөләк йөрөткән. Заманса аппараттар ярҙамында ғалимдар кешенең aураһын күрә алды. Улар әйтеүенсә, бөтә кешенең дә aураһы бөтөн, һау, төҙөк булмай. Кемдәрҙеңдер aураһы тишелеп бөткәнлеге асыҡ күренә. Был - кешенең иммунитеты емерелеүен, стрестар, депрессиялар, шулай уҡ төрлө ырым-боҙомдарҙың үҙ эшен эшләүе тураһында һөйләй. Һөләк ҡуйһаң, был "энергетик тишектәр" ямала һәм аура бөтөнлөгө ҡайтарыла.

## Һеҙ дөрөҫ туҡланыуҙы нисек аңлайһығыҙ?

Бөгөн кеше тик тәмле аҙыҡтарҙы ғына ашарға күнеккән. Ә беҙҙең аш һеңдереү системабыҙ үләнгә, йәғни клетчаткаға көйләнгән. Беҙ тамыраҙыҡтар, ҡайырҙар, үләндәрҙең ашарға яраҡлылары менән дә туҡланырға һәләтлебеҙ. Дөйөм алғанда, республикабыҙҙа үҫкән үләндәрҙең 72 процентының өҫкө өлөшө, тамырҙарҙың 50 проценты ашарға яраҡлы. Әйтәйек, барыбыҙ ҙа яҡшы белгән айыу ҡурайы үләне иң көслө ағыулы үләндәрҙән һанала. Ә тамыры, ғәжәпкә ҡалғандай, ашарға яраҡлы, хатта аш һеңдереү системаһы өсөн бик файҙалы ла. Был парадоксаль үләндең тамырын икмәк бешергәндә тәмләткес итеп ҡулланалар, салаттар эшләйҙәр. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ: яҙ етеп, ҡышҡы өңөнән сыҡҡан айыу ҙа эсәктәренә ҡыш буйы йәбешеп бөткән ризыҡ ҡалдығынан арыныр өсөн шул тамырҙы эҙләп ашай икән. Сөнки был ризыҡ аш эшкәртеү ағзаларын бик тиҙ ваҡыт эсендә таҙарта. Айыу ҡурайы (дягил) тамырын ашаған кешелә холецистит та, панкреатит та, холангит та осрамай.

Беҙҙең көндәлек ризығыбыҙ бешерелгән, ҡурылған, һәр төрлө шәрбәт ризыҡтарынан ғибәрәт. Ашҡаҙанды тигеҙ өс өлөшкә бүлеп ҡараһаҡ, шуның бер өлөшө ризыҡ, бер өлөшө һыу менән тулы, тағы бер өлөшө буш ҡалырға тейеш, тигән бер бәйғәмбәр. Күп осраҡта табынға ултырған кеше үҙен һуңғы тапҡыр ашағандай тота... Тағы ла, беҙҙең халыҡта ҡунаҡты ҡыҫтап һыйлау йолаһы бар. Һинә һалып бирелгән ризыҡты ҡалдырырға ярамай, яҙыҡ була, хужаны ихтирам итмәү һанала, йәғни "ямандан ярты ҡалаҡ аш ҡала" тигән төртмә һүҙ күңелебеҙгә нык һеңешкән. Тимәк, хужабикә ризыҡты һеҙгә ниндәй миҡдарҙа һалып бирһә лә, барыбер ашап бөтөрөргә тура килә. Кемдең "яман" булып ҡалғыһы килһен! Көн дә ризыҡты бер балғалаҡҡа арттыра барған хәлдә лә кеше ашҡаҙаны йәйелә бара. Ризыҡ өҫтөнә ризыҡ ашағанда ашҡаҙанда барыһы ла болғана. Был, әлбиттә, кәрәкле биҙҙәрҙең кәрәкле миҡдарҙа ферменттар бүлеп сығарыу функцияһының боҙолоуына килтерә. Шунлыҡтан кеше эсе күбеүҙән яфалана. Шулай уҡ лайлаға әйләнә торған ризыҡты күп ашау ҙа файҙаға түгел. Картуф, дөгө, аҡ икмәк, макарон, сыр, ит - йәбешкәк массаны барлыҡҡа килтерә торған ашамлыҡтар. Элек ит ашатып үлтереү язаның бер төрө булған, тимәк, итте саманан тыш күп ашауҙың зыянын борондан уҡ белгәндәр. Итле ризыҡ ашайһың икән, иң алдан йәшел салат ашау фарыз. Сөнки йәшел салаттар аш һеңдереү ағзаларындағы ферменттарҙы әүҙемләштерә.

Ашҡаҙан аҫты биҙенең, үт ҡыуығының эшен еңелләштереү өсөн укроп, һуған, һәр төрлө йәшел салаттар ашарға кәңәш итер инем. Сөнки бауыр "лаборатория" булараҡ, үҙенә кергән үлән-салаттар аша ризыҡ эшкәртеүгә булышлыҡ итеүсе энзимдар бүлеп сығара. Ошо осраҡта ғына ризыҡ тулыһынса үҙләштерелә.

## Дөрөҫ туҡланмау нимәгә килтерә?

Ғаиләлә тәмле итеп аш-һыу әҙерләүсе ҡатын-ҡыҙ йәшәй икән, тимәк, был ғаилә ағзаларының аш эшкәртеү һәм һеңдереү ағзаларында ҙур проблемалар барлыҡҡа килеүе мөмкин: бауырҙың лайла менән көпләнеүе, матдәләр алмашыныуы боҙолоуы, һимереү, ашҡаҙан аҫты биҙенең, үт ҡыуығының шешеүе, ашҡаҙан, эсәк ауырыуҙары, ауыр кәүҙәлелек, быуын ауырыуҙары, ҡан баҫымының күтәрелеүе, шәкәр ауырыуы. Һимереү менән яфаланған кешеләр үҙҙәренең рационына етерлек иғтибар бирмәй, кәрәгенән артыҡты ашай-ашай, ашҡаҙанының һыйҙырышлығын саманан тыш арттырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡала.

Францияла ҙур байлыҡҡа эйә булырға хыялланған бер ҡатын байығыуҙың шундай үҙенсәлекле юлын һайлай. Бер-бер артлы өс бай иргә кейәүгә сыға, уларҙы шул тиклем тәмле аштары менән һыйлай. Ә ир-егет бер ваҡытта ла тәмле аш алдында нәфсеһен тыя алмай. Был француз ҡатынының ирҙәре лә тап туҡланыуҙа сама белмәү арҡаһында һимереүгә, төрлө сирҙәргә дусар булып, донъя менән хушлаша тора. Ҡатын шулай итеп өс ирҙең дә байлығына хужа булып ала...

**яҡыныраҡ**

Әгәр ризыҡ күләмен ярты балғалаҡҡа ғына арттыра барһаң да, үҙең дә һиҙмәҫтән уны ашап бөтөрәсәкһең. Аш һеңдереү ағзалары ҡарыша белмәй. Уларға күпме эш ҡушылһа, шул тиклем эште эшләргә тырыша, сөнки башҡа саралары юҡ. Бына шулай ашай-ашай үҙебеҙҙе ризыҡтан май эшкәртеү "заводына", май "келәтенә" әйләндерәбеҙ. Кәрәкле энергияны алабыҙ ҙа, артығын май рәүешендә һаҡлауға һала барабыҙ. Мәҫәлән, 100 грамм пирожный йә булмаһа торт ашағандан һуң билгә 30 грамм май ултыра.

Май йыйыуҙың тағы бер нисә сәбәбе - гендар, йән һәм күҙәнәк хәтере. АҠШ ғалимдары әйтеүенсә, гендарға кешелек кисергән төрлө хәлдәр - һуғыштар, ваба, тағун афәттәре тураһындағы мәғлүмәт яҙылған. "Ризыҡ бар саҡта күберәк ашай һалырға кәрәк" тигән уй беҙҙең гендарыбыҙҙа, йәнебеҙҙә, күҙәнәктәребеҙҙә көн үҙәгендә торған мәсьәлә. Элекке Совет осорондағы ярым ас йәшәгән халыҡ, үҙ һаулығына был килешәме, юҡмы икәнен уйлап тормаҫтан, һоғаланып ашарға мәжбүр. Быуындары күтәрә аламы, юҡмы, 20-30-ар килограмм артыҡ ауырлыҡ туплаған кешеләр бар. Был бахырҡайҙар һигеҙәр, унар кирбес күтәреп йөрөгән эшселәрҙе хәтерләтә. Ниндәй ҙур яза бит был! Кеше ашар өсөн йәшәргә түгел, йәшәү өсөн ашарға тейеш.



*1346-1351 йылда бөтә донъяға холера сире таралғас, был афәт 75 миллионға яҡын кешенең ғүмерен өҙә. Тере ҡалған сирлеләрҙе һөләк ҡуйып ҡотҡара башлайҙар. Һөләк был яман сиргә вакцина кеүегерәк тәьҫир иткән. Әйткәндәй, һөләктө тикшереүсе ғалимдар йәш быуынға һөләк ҡуйыуҙы мотлаҡ үткәрелә торған сара булараҡ ғәмәлгә индереү тәҡдиме менән Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт иткән. Уларҙың дәлилдәрендә шундай факттар бар: һөләк ҡуйҙыртҡан кешеләр енәйәт ҡылып бармай, сөнки һөләк рухи сәләмәтлекте нығыта. Һөләк ҡуйҙыртҡан кешенең интеллект кимәле арта, иммунитеты нығый, хәтере яҡшыра. Уҡыусыларҙың белем үҙләштереүгә һәләте, өҫтәл артында ултыраҡлығы арта. Быны үҙҙәрендә һынап ҡараған ҡайһы бер студенттар имтихандар башланыр алдынан һөләк терапияһына йөрөй.*

*✓ Таҙа һыуҙы, сәйҙе аҙ эсеүселәр күҙҙәре һөҙөләп, күңелһеҙ генә йөрөйҙәр. Уларҙа мейеләгә ҡан әйләнеше насарайыуы, хәтер ҡыҫҡалығы, йәшәүгә дәрттәре кәмеүе, тиҙ арыу, насар күреү кеүек әҙемтәләр күҙәтелә.*



# ҺАУ КЕШЕЛӘРГӘ... йөрөгөҙ

## Һау-сәләмәт булыуҙың башҡа серҙәре

Медицина ғилемендә кешегә бер тәүлек эсендә ике литр таҙа һыу эсеү зарур тигән ҡағиҙә бар. Мин бының менән тулыһынса килешәм. Шулай ҙа кеше һыуҙы сәйҙән дә ала. Скандинавия ғалимдары әйтеүенсә, әгәр кеше көнөнә 8 сынаяҡтан аҙ сәй эсә икән, ул үҙенең инсультҡа һәм инфарктҡа дусар булыу ихтималлығын ун тапҡырға арттыра. "Мин тәүлегенә 3-4 сынаяҡ сәй эсәм" тигәндәрҙең кемеһен генә тикшереп ҡараһам да, бөйөрөндә һәм үт ҡыуығында таш, ҡом булыуын асыҡлайым. Уларҙы йөрәк, бөйөр көсһеҙлөгө, ҡан ҡуйылығы, үт ҡыуығындағы таш ыҙалата. Таҙа һыуҙы, сәйҙе аҙ эсеүселәр күҙҙәре һөҙөләп, күңелһеҙ генә йөрөйҙәр. Уларҙа мейеләге ҡан әйләнеше насарайыуы, хәтер ҡыҫҡалығы, йәшәүгә дәрттәре кәмеүе, тиҙ арыу, насар күреү кеүек әҙемтәләре күҙәтелә.

Кеше мейеһендә эреле-ваҡлы ярты миллионға яҡын ҡан тамыры бар. Уларҙы туйындырыу өсөн йөрәктең көслө, ҡандың билдәле миҡдарға тиклем шыйыҡ, теремек булыуы шарт. Тап ҡан ҡуйырыуы йә йөрәктең көсһөҙләнеүе арҡаһында ҡан әйләнеше мейеләге сәс нәҙеклек кенә ҡан тамырҙарын - артерияларҙы кәрәкле матдәләр менән тәьмин итә алмай башлай. Һөҙөмтәлә кеше тиҙ ҡартая, тиҙ күҙһеҙ ҡала, тиҙ арый, ғөмүмән, ас мейе ағзаларыбыҙ менән насар идара итә башлай. Әйтелгәндәргә өҫтәп, саф һауала йөрөргә, тәбиғәттә күберәк булырға, физик эштән ҡурҡмаҫҡа, күберәк һау кешеләр менән аралашырға, боҙҙан эретелгән һыу эсергә, баланслы туҡланырға тәҡдим ителә. Ҡанды әүҙем, шыйыҡ хәлендә тотор өсөн күп хәрәкәт итергә кәрәк. Шулай уҡ баланслы туҡланыу, һыу эсеү менән бер рәттән, ҡанды шыйығайта торған ризыҡтар һәм үләндәр ҙә ҡуллана белеү кәрәк. Әйтәйек, иртәле-кисле берәр ус мүк еләге (клюква) ашау ҡанды теремек тоторға ярҙам итә. Шул уҡ мүк еләге бөйөр, бәүел ағзалары өсөн көслө антибиотик та. Ҡандала (донник) үләне ҡанды шыйығайтыуға, ҡан тамырындағы төйөндәрҙе бөтөрөүгә ныҡ ярҙам итә.

Мейе асығыуына йөрәк көсһөҙлөгө килтерә. Йөрәкте көслө тотор өсөн кешегә ваҡыты-ваҡыты менән кардиотоник үләндәр төнәтмәһе эсеп алырға кәрәк. Кардиотоник үләндәр төнәтмәһен ҡанды шыйығайтыусы үләндәр менән бергә эсеү ҡулайлы.

## Кеше үҙен-үҙе һауыҡтыра аламы?

Кеше шундай биологик система - уға үҙен-үҙе һауыҡтырыу һәләте һалынған. Кеше мөғжизә эшләй ала. Беҙҙә бер врач-хирург була торғайны. Ул һәр саҡ "тере кешелә бөтә яралар ҙа уңала", тип ҡабатларға яратты. Уның әйткән һүҙәре хаҡ, тик бының өсөн рухи һәм физик сәләмәт булыу талап ителә. Кешенең үҙенә кәрәк тиклем медицина ғилеме булыуы, уның дөрөҫ туҡланыуы, ял итә белеүе, стрестан сыға, унан һаҡлана белеүе, тәбиғәт менән дуҫлыҡ, физик әүҙемлек - бына былар сәләмәтлеккә илтер саралар. Шулай уҡ үҙеңдең телең менән дә гармонияла булырға кәрәк. Һүҙең ярҙамында үҙеңә файҙа ла, зарар ҙа килтереүең бар.

*Алкоголде ризыҡ форматында тәҡдим итеү йәш быуынды алдау, уларҙы эсергә өйрәтеү, уларҙың кеҫәһе ярҙамында ҡаҙнаны тулыландырыу, сәйәси әүҙемлеген, ижади мөмкинлектәрен юҡҡа сығарыу, пенсия йәшенә еткермәү маҡсатында эшләнә. Алкоголле эсемлектәр аҙыҡ-түлек магазинына шуның өсөн ҡуйылған. Ғалимдар "Алкоголь - это протоплазмический, внутриклеточный яд и наркотик", "Алкоголь применяется только для дурмана", ти. Алкоголдең составында туҡландырыусы бер нәмә лә юҡ. Тимәк, алкоголь изделиеларының аҙыҡ-түлек магазинында торорға ла хаҡы юҡ.*
*Беҙ балаларыбыҙға: "Ана, күрҙеңме, балаҡай, ағыу һатып торалар", - тип әйтһәк тә, бала: "Аҙыҡ-түлек магазинында тора бит, ул нисек ағыу булһын? Ана бит, байрам һайын үҙегеҙ йырлашып тороп эсәгеҙ?" - тип яуап ҡайтара ала. Беҙҙе бына шулай ике йөҙлө булырға өйрәттеләр.*

Уйҙарыңа ла иғтибар итергә кәрәк. Һүҙҙән дә көслөрәк, тәьҫирлерәк ҡорал - уй. Кешенең ҡылығы ла, һаулығы ла уйҙан башлана.

Кеше үҙ һаулығы тураһында тулы мәғлүмәтле булырға тейеш. Йылына бер тапҡыр УЗИ үтергә, ҡан һәм бәүел анализдары бирергә һәм һәр төрлө профиль табиптарына күренеп торорға кәрәк. Ғөмүмән, кешегә үҙ һаулығын үҙе хәстәрләй башларға ваҡыт. Бының өсөн, Аллаға шөкөр, бөтәһе лә бар: медицина ғилеме китаптары, яңы информацион технологиялар аша барыһы менән дә танышып торорға була. Кеше организмы үҙен-үҙе дауалай белә торған система булараҡ, бының өсөн аҙ ғына булһа ла ынтылыш эшләһә, һаулығы тиҙ генә ыңғай йүнәлеш ала һәм һауыға башлай. Гиппократтың һүҙҙәрен хәтергә төшөрәйек: "Һәлкәүлек һәм бер ни ҡыбырлатмай ултырыу физик һәм рухи боҙолоуға килтерә". Ә Әбүғәлисина: "Кем дә кем физик күнекмәләр менән шөғөлләнеүҙән туҡтай - шул хәлһеҙләнә, сөнки хәрәкәт етмәү арҡаһында уның ағзалары көсһөҙләнә", - ти. Ғөмүмән, үҙеңдең һаулығыңды белмәү, яңылыш туҡланыу, ялҡаулыҡ - үҙеңә ҡарата енәйәт. Табиптың күҙенә ҡарап, унан һаулыҡ талап итеп ултырыу - хурлыҡ.

Беҙ замана машиналарына ултырып йөрөргә яратабыҙ, уларҙың нисек эшләгәнен яҡшы аңлайбыҙ. Уның моторына майҙың ни өсөн кәрәклеген, уның коробкаһы, электрон схемаларының нисек эшләгәнен беләбеҙ. Тормошобоҙҙа шул хәтлем ҡатмарлы нәмәләр менән эш итергә өйрәнгәнбеҙ, ә үҙебеҙҙең һаулығыбыҙҙы, йәшәү рәүешебеҙҙе төҙәтә белмәйбеҙ, тән төҙөлөшөбөҙҙө өйрәнмәгәнбеҙ. Медицина йәмғиәте һәм закон кешегә үҙ һаулығын өйрәнеү һәм медицина ғилеме кәрәк түгел, тип һанай. Мин быны кешенең шәхси хоҡуғын боҙоу, тип һанайым. Кеше үҙ һаулығына үҙе хужа булырға тейеш. Урамда ҡолап ятҡан кеше янына кеше бармаҫ булды. Сөнки зыян күреүсе кеше янына "Тиҙ ярҙам" машинаһы һәм полиция хеҙмәткәрҙәре генә яҡын килергә тейеш. Был осраҡта ярҙам итеү маҡсатында зыян күргән кешегә яҡынлашһаң, аҙаҡ һине "крайний" итеүҙәре бар. Ошо күренеш кешеләрҙе эмоциональ һуҡырлыҡҡа килтерҙе һәм ауыр хәлдәрҙә бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙыуға юлдарҙы бикләне, ҡаты бәғерлеләрҙе күбәйтте.

## Эскелектең сәбәбе ниҙә?

Эскелектең иң төп сәбәбе - тәҡдим. Мәжлесме, туй булһынмы - барыһына ла алкоголле эсемлек ҡуйып бирәләр, тәҡдим итәләр. Алкоголде ризыҡ форматында тәҡдим итеү йәш быуынды алдау, уларҙы эсергә өйрәтеү, уларҙың кеҫәһе ярҙамында ҡаҙнаны тулыландырыу, сәйәси әүҙемлеген, ижади мөмкинлектәрен юҡҡа сығарыу, пенсия йәшенә еткермәү маҡсатында эшләнә. Алкоголле эсемлектәр аҙыҡ-түлек магазинына шуның өсөн ҡуйылған. Ғалимдар "Алкоголь - это протоплазмический, внутриклеточный яд и наркотик", "Алкоголь применяется только для дурмана", ти. Алкоголдең составында туҡландырыусы бер нәмә лә юҡ. Тимәк, алкоголь изделиеларының аҙыҡ-түлек магазинында торорға ла хаҡы юҡ.

Беҙ балаларыбыҙға: "Ана, күрҙеңме, балаҡай, ағыу һатып торалар", - тип әйтһәк тә, бала: "Аҙыҡ-түлек магазинында тора бит, ул нисек ағыу булһын? Ана бит, байрам һайын үҙегеҙ йырлашып тороп эсәгеҙ?" - тип яуап ҡайтара ала. Беҙҙе бына шулай ике йөҙлө булырға өйрәттеләр. Инде хәҙер үҙебеҙ балаларыбыҙҙы шуға өйрәтәбеҙ. Балтик буйҙарынан алып Тымыҡ океанға тиклем йәйелеп ятҡан илдә йәшәгән халыҡ ошоға ҡәҙәр кеҫә телефоны, машиналар, электроника эшләй белмәй. Сит ил етештереүселәре ҡыуаныстан беҙгә ҡул саба. Беҙҙән ҡулланыусылар яһап алдылар. Бөтә сит ил баҙары - беҙҙә. Беҙҙең наҙан булыуыбыҙ, мейебеҙҙе эсеп бөтөрөүебеҙ улар өсөн ҡулай. Киң мәғлүмәт, коммуникация саралары "төкөрөк сәсеп" тик сит ил техникаһын маҡтай, ә уларҙы маҡтап, үҙенең хурланғанын башына ла килтермәй. Сөнки ғорурлыҡ та, намыҫ та юҡ хәҙер беҙҙә лә, етәкселәребеҙҙә лә.

"Эш юҡ", "тормош ауыр", "ҡатын әрләй" тип, эсеүҙәрен аҡларға маташыуҙы көсһөҙлөк билдәһе тип уйлайым. Егәрле әҙәмдәр төрлө ерҙәргә йөрөп тә эшләй, өй ҙә һала, юҡты бар итеп аҡса ла таба, ғаиләһен дә ҡарай, балаларын да уҡыта, заманына ҡарап һөнәрҙәрен дә арттыра, заман талаптарына яраҡлаша ла белә.

Күп кенә йәш егеттәр ғаилә ҡорорға ынтылып бармай, ҡорғандары - ғаиләләрен тарҡата. Сөнки улар ғаилә алдында социаль яуаплылыҡтан ҡурҡа. Эскелек артына йәшенә. Йәшәү - ул көрәш. Бөйөк уйлап табыусы Эдисон "Бәхет нимә ул?" тигәнгә: "Ул - бер процент талант, 99 процент хеҙмәт", - тип яуап ҡайтарған. Шуға күрә лә мин йәш быуынды иманлы кешеләргә, рухы һәм тәне һау кешеләргә яҡыныраҡ булырға һәм һыйынырға саҡырам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йылғаларҙың кисеүҙәрен белеү - аҫабалыҡ билдәһе, тип әйткәйне алдағы әңгәмәлә бер аҡыллы кеше. Сөнки борон йылғалар ажар, уның ярҙары ҡуйы ҡамыш, таллыҡтар менән ҡапланған саҡтарҙа яугирҙәр үҙҙәре генә белгән юл менән кисеүҙе эҙләп тапҡан. Кисеүгә илткән юл урау-урау, алдатҡыс, юл яҙлыҡтырғыс, йәғни дошмандан йәшерен булған. Сер итеп тотолған. Кисеү урынын һатыу - халҡыңды һатыуға бәрәбәр булған. Кисеү таба алмаған дошмандар тураһында халыҡ йыры ла бәйән итә. Кисеү - боронғо тәбиғи "күпер". Ул - теге яҡ ярға сығырға теләүселәргә ярҙам сараһы, тәбиғи "баҫма". Бөгөн йылғалар аша оло, Көнбайыш тибындағы күперҙәр һалына. Халыҡҡа йылға ҡаршылығын үтеп сығыу юлы иҫ киткес еңеләйтелә. Итек сисеү түгел, йылғаға сәләм бирергә лә өлгөрмәй ҡалаһың... Шулай ҙа, урындағы халыҡ йылғаларҙы файҙаланыуҙан туҡтамай. Ни өсөн кисеү хаҡында һүҙ башланыҡ һуң? Марат уҙаман Ишмөхәмәтов менән әңгәмә шул юҫыҡҡа ҡараштыы борҙо бит әле. Заманса медицина ҡорамалдары кешегә ярҙам итә алмаған осраҡтар ҙа булғылай. Шул саҡта тәбиғи ысулдар, быуаттар буйы ҡулланылған тәбиғи халыҡ медицинаһы ярап ҡала... Күперҙәрҙе, баҫмаларҙы үткән саҡта, кисеүгә илткән юлдарҙы ла онотмаҫҡа саҡыра түгелме ҡунағыбыҙ?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Биш нәмәне ҡәҙерләгеҙ әле биш хәл булмаҫ элек: Йәшәүеңде - үлмәҫ элек, һаулыҡты - ауырымаҫ элек, Ерҙе - ерҙән китмәҫ элек, Йәшлекте - ҡартаймаҫ элек, Байлығыңды - бөлмәҫ элек.*



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Раuил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

140
Берәү кисеү таба алмай кисергә,
Ә берәү һыу таба алмай эсергә.

141
Туҡмар булһа күршеһенең этен,
Күршеһен дә, тимәк, ул рәнйетер.

142
Тәрбиәле кеше беленеп торор,
Ниндәй йәшендә лә күркәм булыр.

143
Тоғро ҡатын булғанда,
Һәйбәт күршең булғанда,
Яҡшы атың булғанда,
Иркен йортоң булғанда,
Бәхет шунда, туғандар!

144
Ике һауыт алтыны бар,
Даулаша өсөнсөһөн.
Бер ус тупраҡ ҡандырыр бит
Ҡомһоҙ күҙҙең нәфсеһен.

145
Бала - донъяның байлығы,
Йәшәүҙең нур - төҫтәре.
Йәннәттең хуш еҫен бөркә
Баланың хуш еҫтәре.

146
Оялсанлыҡ менән иман айырылмаҫ,
Береһе бөтһә, икенсеһе бөтмәй ҡалмаҫ.

147
Биш нәмәне ҡәҙерләгеҙ
Әле биш хәл булмаҫ элек:
Йәшәүеңде - үлмәҫ элек,
Һаулыҡты - ауырымаҫ элек,
Ерҙе - ерҙән китмәҫ элек,
Йәшлекте - ҡартаймаҫ элек,
Байлығыңды - бөлмәҫ элек.

148
Ҡабаланыу - тик иблистән,
Әммә ашыҡ һин биш эштә:
Ҡыҙҙы кейәүгә бирә һал,
Бурысыңды ҡайтара һал,
Үлгәнде һуҙмайса ерлә,
Юлсының ашын ҡарай һал,
Гонаһ ҡылһаң, тәүбә итеп,
Рәхим-ярлыҡау һорай һал.

149
Өндәшмәү -
Зирәктең сабырлыҡ һаҡлауы,
Наҙандың йәшенер япмаһы.

150
Әгәр ун өлөштән торһа
Иманға тоғро ҡалыу,
Шул ундың туғыҙ өлөшө -
Хәләл малыңды табыу.

151
Хаҡ мосолман хаҡлыҡ даулап юлдар яра,
Ә яласы көнсөллөктән ҡара яна.

152
Доғаһынан наҙан - залимдың
Файҙалыраҡ йоҡоһо ғалимдың.

153
Таяныsһыҙ емерелер бар донъя,
Исламдың төп таянысы - ғалимдар.

154
Килер заман: бәндәләрҙең бар хәстәре
Булыр аҡса, булыр әйбер - сепрәктәре.
Уйламаҫтар ниҙәр ярай, ниҙәр харам,
Айырмаҫтар хаҡ эштәрҙе гонаһтарҙан.

155
Атайыңа-әсәйеңә ярҙамсыл булһаң әгәр,
Сауаптары хажға барыу сауабына бәрәбәр.

156
Ҡыҙ булһа тәүге бала,
Ырыҫ-бәхеткә була.

**(Дауамы бар).**




1

"Ауылға ниместәр килә!.."

Был хәбәр Ҡорьятмаҫ ауылына килеп еткәндә, унда әлеге йәүкәне сәйерһенеберәк ҡабул итергә тейеш булған һуғыш ветерандарынан бер генә кеше ҡалғайны. "Тейеш булған" тинек, сөнки ауылдың иҫән ҡалған берҙән-бер яугиры Ҡотлозаман ҡартҡа Енеүҙең алтмыш биш йыллығы хөрмәтенә ҡала өр-яңы фатир бирҙеләр. Ҡарт хәҙер район үҙәгендә, бөтә уңайлыҡтары булған йортта йәшәгәс, әлеге хәбәр уға әллә барып юлыға, әллә юҡ.

Ә Ҡорьятмаҫтың ҡалған халҡын ни менәндер аптыратыуы бик ауыр. Дөрөҫөрәге, улар аптырауҙан уҙған, сөнки һәр бер өйҙөң иң ҡәҙерле ерендә ултырған хикмәтле ҡумта тараҡтан ғибрәттәрҙе көн һайын үҙ күҙҙәре менән күрә, үҙ ҡолаҡтары менән ишетә. Әлбиттә, әлеге мәғлүмәттәр араһында файҙалылары ла бар, тик уларҙың да яртыһын үҙҙәренә дан һәм нан яулау өсөн башҡаларҙан урланған, үҙләштерелгән фекерҙәр тәшкил итә. Ҡыҫҡаһы, ауыл, район, республика ғына түгел, ә донъя хәлдәренән хәбәрҙар булған кешеләр өсөн, халыҡ араһында йөрөгән бер ләкап менән әйткәндә, "һин ни, мин ни, мунсалағы ен ни".

Бына, әлеге ниместәрҙе генә алайыҡ. Әйтмәһә лә, ауыл халҡының улар тураһында ни уйлағанын белеп торам: "Нимес тә шул беҙҙең ымаҡ әҙәми зат инде - ике аяғы, ике ҡулы, башҡа ағзалары, тигәндәй. Артыҡ та, кәм дә түгел. Килһә, килә инде, моғайын, ҡырҡ беренсе йылдағы һымаҡ яу булып ябырылмайҙарҙыр..."

Иртәнге ундар тирәһендә йоҡонан тороп, ҡоро сәй булһа ла эсеп алайым, тип электр плиткәһенә һыу ҡуйып йөрөгән Мансур ғына ишетмәгәйне ауылдағы яңылыҡты. Ҡырҡ дүрт йәштә булыуына ҡарамаҫтан, һаман өйләнмәгән был егет атаһы менән әсәһенән ҡалған алты мөйөшлө өйҙә яңғыҙы ғына йәшәй. Уның күп һанлы ир һәм ҡыҙ туғандары, "Үсеп еткәс айырылыштыҡ ҡош балалары кеүек" тигән йыр юлдарының хаҡлығын раҫлап, һәр береһе үҙ һыңарын табып, тирә-яҡҡа таралышты ла бөттө. Улар араһынан Хоҙай Тәғәлә тик Мансурға ғына ата нигеҙен һаҡларға ҡушҡан. Ысын булһа, кешенең тәҡдире әсә ҡарынында саҡта уҡ маңлайына яҙыла, ти. Ул фекерҙе ҡырҡа-яран дөрөҫләр өсөн тәрән белем юҡ инде, беҙгә тик Мансурға ҡарап: "Бәлки, шулайҙыр", - тип төһмәт итергә генә ҡала. Ана бит ул, яҙмыш тигәнең: ни эш, ни кәләш, тигәндәй. Уның ҡояш төшкә баҫымлауғараҡ уяныуы ла шуға бәйле - эш-көш булмағас, төнө буйы берҙән-бер йыуаныс килтергән телевизор ҡарай.

Бынау үҙгәртеп ҡороу тигән ғәләмәткә тиклем Мансур һәп-һәйбәт эшләп йөрөнө - башта йылҡы, унан һуң совхоз һарыҡтарын көттө. Һүҙ ыңғайында шуны әйтеп үтәйек: егет "үҙгәртеп ҡороу" тигән һүҙбәйләнешкә ҡырҡа ҡаршы. Ни өсөн тиһәң, элекке ҡанундарҙы, йәшәү рәүешен үҙгәртеләр ҙә, тик урынына бер нәмә лә ҡорорға йыйынмайҙар. Шуға күрә, Мансур әлеге лозунгылағы һүҙҙәрҙең икенсеһен артыҡ тип иҫәпләй. Егеттең фекеренә асыҡ дәлил - ауылдағы бер түгел, ике таш һарай. Дөрөҫөрәге, уларҙың өнөрәйеп ятҡан нигеҙ урындары. Ауылдағы һарыҡ фермаһы өсөн тәғәйенләнгән был һарайҙарҙы ҡырҡ ике йыл элек әрмәндәр төҙөп киткәйне. Теле сыҡыр-сыҡмаҫ ҡына булған ул заманды Мансур яҙа-йоҙа хәтерләй. Ә бына олораҡтар уның шул саҡтан ҡалған бер мәрәкәһен ара-тирә иҫенә төшөрөп ала. "Ш" хәрефен әйтә алмаған Мансур үҙҙәренә йомош менән килгән берәүгә: "Бер матина тат татый, бер матина ҡом татый", - тип хәбәр һөйләй икән.

Аҙаҡтан малайҙың был етешһеҙлеге бөттө - булмаған өн барлыҡҡа килде. Ә бына үҙгәртеп ҡороу башланғас, бар нәмә юҡ булды - һарайҙарҙан елдәр иҫтә. Уларҙың ташын кем генә урламаны, ҡайҙан ғына килеп тейәп алып китмәнеләр! Ғәжәбе шул: көпә-көндөҙ ҡылынған был енәйәтте туҡтатыусылар табылманы. Әллә барыһы ла урлашҡанға микән? Ысынлап та, үҙе сәлдереү менән мәшғүл булған әҙәм нисек итеп башҡаларға: "Һайт, ниңә урлашаһығыҙ?"- тип әйтә алһын? Мансур ошоларҙы уйлай-уйлай ҙа: "Юҡ, барыбер "үҙгәртеп ҡороу" ләҡабы хәҡиҡәткә тап килмәй, уны "үҙгәртеп боҙоу" тип атаһалар, дөрөҫөрәк булыр ине", - тигән һығымта яһай.

Мансурҙың үҙенә килгәндә, ул бөгөнгө яманатлы үҙгәртеп боҙоу процесында ҡатнашмаған берҙән-бер зат. Улай тигәс тә, бөтә ил ҡуләмендә түгел, ә Ҡорьятмаҫ ауылы сиктәрендә. Урлашыр ине - әлеге лә баяғы, кәләш юҡ, бисә булмағас, ҡомарҙы ҡуҙғытыусы этәргес юҡ. Ә яңғыҙ башың менән үкһеҙ йәнеңде урлашмаһаң да аҫрап була. Ауылда йыл әйләнәһенә эш бөтәме ни: йәйен бесән, ҡышын утын. Улар араһында һуғыш һуйыу һәм башҡа бөткөһөҙ хужалыҡ эштәре. Ә Ҡорьятмаҫтың яртыһынан күбен әләгә-йығыла мал аҫрарға тырышып ятҡан ҡарт-ҡоро тәшкил итә. Етмәһә, барыһы ла тип әйтерлек әбей-һәбей. Эш эҙләп сит-ят тарафтарға олаҡҡан балалары ҡайтһа, йылына бер ҡайтып китә. Шуға күрә, ул бисараларҙың күҙ терәп торған кешеләре - Мансур. Уны әллә ни күреп ҡәҙерләп, эре-торо эштәренә аҡсаларын аҙерләп кенә торалар. Шулайтып, аҡмаһа ла тама, хатта әленән-әле тамаҡ сылатырға ҡала. Йәшәһен ауыл, уның тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эштәре һәм ололарға пенсияны мул тәғәйенләгән хөкүмәт!.

Әйткәндәй, беҙ өҫтән-мөҫтән генә Мансур менән танышҡан арала совет осоронан ҡомартҡы булып ҡалған электр плиткәһе сәйнүктәге һыуҙы ҡайнатып та сығарҙы. Өй хужаһы, урынынан ҡуҙғалып, кәштәләге сәй ҡумтаһын алырға үрелгәйне генә, өй ишеге асылды. Мансурға ҡыялаш ҡына йәшәгән тиҫтере Заһит икән. Ул да эш менән кәләштән мәхрүм. Әммә Заһиттың хәле саҡ ҡына арыу - ул пенсиялағы әсәһе менән донъя көтә. Икеүләп хөкүмәткә рәхмәт уҡып, бары менән байрам, тип йәшәп тик яталар.

Ғәҙәттә, Заһит, үҙенең кәйефенә ҡарап, йә башҡортса "Һаумы", "Арыумы", йәки урыҫсалап "Здорово" тип иҫәнләшә ине. Был юлы уның: "Гутен таг!" тигәнен ишетеп, Мансур ғәжәпләнә биреберәк ишек яғына боролоп ҡараны. Йәнәһе, әллә Заһит түгелме? Аптырауҙанмы, кәрәкмәгән мәлдә иғтибарын икенсе нәмәгә йүнәлтеүҙәнме, уның ынтылған ҡумтаһы кәштәнән ҡолап төштө, стенаға терәтеп ҡуйылған өҫтәлгә сәй бөртөктәре һибелде.

- Гутен морген, - тине Мансур яһалма ризаһыҙлыҡ менән. - Йөрөйһөң шунда, сәйҙе түктертеп...

- Нимә төшкә тиклем йоҡлайһың? Ҡабырғаң серей бит...

- Шунан? - тине Мансур, сәселгән сәй бөртөктәрен усы менән ҡумтаға һыпыра-һыпыра.

- Шунан тип ни, ауылға ниместәр килә, ти ҙаһә...

- Шунан? - Мансур уны үртәүен дауам итте.

- Ултырған да шыуған, кино төшөрөргә киләләр тиме?

- Әллә. Тауыҡтар менән бергә уянған кеше - һин беләһеңдер, - тине Мансур. - Ниместәрҙең йүнле киноһы бармы? Әйҙә, лутсы сәй эсәйек...

2

Әммә ҡорҙаштарға һәр ваҡыттағыса иркенләп сәй һемереп ултырырға яҙманы бөгөн. Мансурҙың сәйе түгелеүе лә шуға бер ишара булды, буғай. Сәбәбе - асыҡ тәҙрә аша урамдан ишетелгән сәйер шау-шыу ине. Ғәҙәттә, былдай ығы-зығы ауылға йә берәй түрә-ҡара, йә кеше һемәйтеп йөрөүсе алыпһатарҙар килгәндә күтәрелә. Моғайын, һынағанығыҙ барҙыр: мәҙәни үҙәктәрҙән ситтә ятҡанғамы, бәләкәй ауылдарҙың халҡы уғата ҡыҙыҡһыныусан була. Һағындырып ҡына булып ала торған ваҡиғаны берәйһе ниндәйҙер сәбәптән үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ ҡолағы менән ишетмәһә, аҙаҡтан уның ауырып китеүе ихтимал. Ана, ышанмаһағыҙ, Заһитҡа күҙ һалығыҙ: ул елтәнләтә баҫып асмалы тәҙрәнән башын тығып ҡараны ла:

- Райондан килгәндәр. Берәүһе хакимиәт башлығы үҙе шикелле хатта, - тигән хәбәр һалды.

- Кит әле, ул нишләп йөрөһөн? Уны үҙең һымаҡ елғыуар тип уйлайһыңмы? - Мансур уның зитына тейеүен дауам итте. Заһит та бирешергә уйламаны:

- Һә! Бөтә кешене үҙең кеүек күрәш тип беләһеңме? - Көнө-төнө телевизорға төңкәлеп ултырыуҙан Мансурҙың күҙҙәре насарая башлауына төрттөрә, хәсис.

- Шулай булһам да, армияла хеҙмәт итеп ҡайттым бит әле. - Айыу табанлығы арҡаһында комиссиянан үтмәгән Заһиттың һәрби хеҙмәттән тороп ҡалыуына нескә генә ишара инде был.

Ахырҙа Заһит түҙмәне:

- Ярай, теленә һалынып торма! - тине килешмәле төҫ менән. - Былайтып торғансы, әйҙә, барып күрәйек. Нимә һөйләп йөрөйҙәр икән?..

Егеттәр барып еткәндә, "Мин зур түрәне йөрөтәм" тигәндәй, маһайып

ултырған ҡара "Джип" машинаһын байтаҡ халыҡ уратып алғайны. Ыҫынлап та, район хакимиәте башлығы икән шул. Ул йыйылыусыларға ниҙер һөйләй. Түрәнең эргәһендә бер һөйәк өсөн хужаһының ҡулын яларға әҙер тоғро көсөк ҡиәфәтендә ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы, йәки халыҡ телендә нығынған төшөнсә буйынса, силсәүит. Район башлығы әңгәмә урынына яҡынлаған егеттәр менән:

- Һа, бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына. Бына, иң кәрәкле кешеләр килә, - тип алмаш-тилмәш күрешеп сыҡты. Ғәҙеллек хаҡына әйтмәй булмай, "Башҡорт түрә булһа, сабатаһын түргә элә", тигән әйтем уның тураһында түгел. Йәғни, башҡалар ҡағиҙә булһа, ул - иҫкәрмә. Элек, эсенә бер бүлексә сифатында Ҡоръятмаҫ ауылы ингән совхозда партком секретары булып эшләгәндә лә шулай ябай, кешеләргә алсаҡ мөғәмәләле ине. Хәтеренең шәпленеп әйт әле - кисә генә аралашҡан кешеләй, егеттәрҙең исемдәре менән өндәшә:

- Яңылышмаһам, һин - Мансур, ә һин - Заһит бит әле?

- Эйе, эйе, - тиеште тиҫтерҙәр, бер-береһенә ҡарашып.

- Бына нимә, егеттәр, - тип дауам итте башлыҡ. - Алдараҡ килгәндәргә аңлаттым инде. Һеҙгә ҡыҫҡа ғына итеп әйтәм: кино төшөрөргә Германиянан бер төркөм кешеләр килә. Улар интернеттан ҡарап, һеҙҙең ауылды һайлаған. Һеҙгә уларҙың бер һалығы ла теймәйәсәк. Берҙән-бер үтенестәре - тауҙарҙа йылҡы менән һарыҡ көтөүҙәрен күреү. Төшөрөп алырға уйлайҙарҙыр, моғайын. Шуға күрә, егеттәр, һеҙгә берәй аҙна самаһы элекке һөнәрҙәрегеҙҙе иҫкә төшөрөп алырға тура килер...

- Һуң, - тип башлыҡты бүлдерергә мәжбүр булды аптыраған Мансур. - Малһыҙ нindәй көтөү?..

- Уныһы не ваша забота. - Район хужаһы үҙе партком секретары булған осорҙағы совет идеологияһының "тиҙҙән бер генә милләт һәм бер генә тел буласаҡ" тигән мәҫәлен һағыныпмы, әллә ҡәҙимге ғәҙәт буйынсамы, урыҫсанан һалдырҙы. - Мал буласаҡ, барыһы ла һөйләшелгән. Уларҙы төнгөләккә бикләп тороу өсөн кәртә йүнләү хәстәрлеген урындағы хакимиәт үҙ өҫтөнә ала...

Башлыҡтың аҙаҡҡы һүҙҙәренән һуң, уның эргәһендә торған кесе түрә, себенселәгән ат һымаҡ, башын аҫлы-өҫлө һелкергә тотондо. Уның бер юлы ризалыҡты, буйһоноуҙы, хуплауҙы белдергән был хәрәкәте берсә туҡтап, берсә яңынан ҡабатланып, район хакимының һүҙе тамамланғансы дауам итте. Хужа, әңгәмәнең аҙағы яҡынлашҡанын аңғарып, ҡулындағы алтын сәғәткә ҡарап алды:

- Значит, һөйләштек, егеттәр?

Ул үҙенең һәр һүҙе, һәр бойороғо һис шикһеҙ үтәлеүен тормоштоң төп ҡануны тип иҫәпләгәнгә күрә, Мансур менән Заһиттың бер-бер артлы:

- Ярай һуң...

- Уның ниндәй ҡыйынлығы бар, - тиешеүҙәрен ишетмәне лә шикелле, яңынан үҙен уратып алған ололарға мөрәжәғәт итте:

- Һеҙҙең менән дә килештек: алда әйтеүемсә, йортоғоҙ ҙа, үҙегеҙ ҙә ялтырап торһон. Как никак, сит илдән киләләр, улар алдында мах бирерлек булмаһын. Буяу һәм башҡа төҙөләш материалдары буйынса бына үҙегеҙҙең хужағыҙға (ул һаман да ризалыҡ белдереп башын һелкеүҙән туктамаған силсәүиткә ымланы) мөрәжәғәт итегеҙ.

Шулай тине лә башлыҡ, тәҙрәләренә ҡараңғылатылған быяла ҡуйылған машинаһына инеп ултырҙы. "Джип", "Белдегеҙме?", тигәндәй, көйлө генә геүләп бер аҙ ултырҙы ла, артынан еңелсә саң уйнатып, ғорур ҡиәфәттә ауылдан сығып китте.

**(Дауамы бар).**

МИН БЕЛГӘН УРЫҪ

*Риф МИФТАХОВ.*

# БЕРҘӘМ БУЛҺАҠ, ТАТЫУ ТОРҺАҠ,

## Беҙ хазина - алтындай!

*Бер дуҫың булһа - байһың,*
*Ике дуҫың булһа - байһың, бәхетлеһең,*
*Өс дуҫың булһа - байһың, бәхетлеһең һәм еңелмәҫ кешеһең.*
*Боронғолар һүҙе.*

**Беҙҙең Рәсәй исемле ватанда 160-тан ашыу төрлө милләт вәкилдәре йәшәй. Һәр милләт әсә телендә һөйләшеүе, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, үҙенә генә хас мәҙәниәте, сәнғәте һәм башҡа күп төрлө үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Төйәгебеҙ шундай булғаны өсөн ҡыҙыҡлы - милли биҙәге, төрлө күркәмлеге башҡа халыҡтарҙы үҙенә тартып-сағырып тора. Был инде тормош менән раҫланған хәҡиҡәт, үткәнге һәм бөгөнгө ысынбарлыҡ. Быны һәр беребеҙ аңларға, ошондай уникаль бәйләнешле дуҫлыҡты йылдан-йыл нығыта барырға һәм уның менән сикһеҙ ғорурланырға тейешбеҙ. Ә инде Рәсәй, төбәк етәкселәренең көндәлек бурысы-хәстәрлектәре был берҙәмлектән үҫеп сыҡҡан хазинаны һаҡлау, яҡлау, тамырҙарын нығытыу булырға тейеш.Ә быны аңлау, яҡлау Рәсәйҙең именлеге, яҡты киләсәге тигән һүҙ.**

Минең быуын - һуғыш алды, һуғыш ваҡыты сабыйҙары, балалары. Беҙгә атай-ағайҙарыбыҙ яуға киткәс, аслыҡ-яланғаслыҡты үҙебеҙҙең иңдә татырға тура килде. Әсәйҙәрҙең, инәй-бабайҙарҙың, атайҙарҙың түҙемлектәренә, хәстәрле һәм изге йөрәкле булыуҙарына әле булһа таң ҡалабыҙ.

Төш һымаҡ ҡына итеп шуны хәтерләйем. Бер көн беҙҙең бәләкәй генә өйгә, алты йән эйәһе өҫтөнә, балаһы менән бер һылыу апайҙы, өҫтәүенә, уның оло йәшниген урынлаштырҙылар. Һуңынан белеүемсә, уларҙы Украинанан алып килгәндәр икән. Беҙҙә байтаҡ ҡына торҙолар улар. Әсәйем беҙҙән тыш уларҙы ла, бигерәк тә балаһын хәстәрләне, нәмәләр ашатырға, бирергә тырышты. Әгәр илдә берҙәмлек, дуҫлыҡ тойғоһо булмаһа, быны эшләп булыр инеме ни? Эйе, дуҫлыҡ - байлыҡ, дуҫлыҡ - бәхет, дуҫлыҡ - еңеү өсөн көс. Һеҙгә тәҡдим иткән шиғырҙарым да шул хаҡта.

Республикабыҙҙың быйылғы йылды дуҫлыҡ, туғанлыҡ йылы итеп иғлан итеүе бик дөрөҫ. Ғәмәлдә, илдә, донъяла һәр йылдың һәр көнө, һәр сәғәте туғанлыҡ-дуҫлыҡ менән йәшәү ваҡыты булырға тейеш. Шунда ғына беҙҙе именлек, яҡты киләсәк көтә. Шулай булыр тип ышанабыҙ!

* * *

Әллә булды ҡырҡ икелә,
Әллә булды ҡырҡ өстә, -
Сабый ғына саҡтарымдан
Төш төҫлө һаман иҫтә.

Йәш балалы бер апайҙың
Беҙҙең менән торғаны,
Өй иҙәне яртыһына
Оло һандыҡ ҡуйғаны.
Шул һандыҡтан -
бар байлыҡтан -
Берәй аҙыҡ сығарһа.
Беҙгә лә бүлә торғайны
Тик бер ҡабым булһа ла.
Ул апайҙың,
балаһының
Кем булған исемдәре -
Иҫемдә юҡ, ә һыйының
Телемдә һымаҡ тәме.
Хәҙер ҙә хәтерҙә әле:
Малайын ҡосаҡлай ҙа,
Үҙ телендә матур итеп
Һуҙып-һуҙып йырлай ҙа:
- Якши? - тиеп ағайҙарҙан,
Минән һораған була.
Ә үҙенең күҙҙәренә,
Мөлдөрәп, йәштәр тула.

...Байтаҡ ваҡыттар үтеүгә
Аңланым: хәтәр йылда
Ул ҡатын балаһы менән
Ут тапҡан беҙҙең йортта.
Фашистың ҡанлы итеге
Ҡаланды тапағанда,
Алыҫтан килгән туғандар,
Һеҙ икән хәҙер ҡайҙа?

Беҙ бер ғаилә!
Был һүҙҙәрҙе.
Юҡ, уйлап сығарманыҡ:
Ҡара көндәрҙә тыуҙы ул,
Шуға ла юғалманыҡ!

Әллә булды ҡырҡ икелә,
Әллә булды ҡырҡ өстә?
Аҙыҡ, йыр, дуҫлыҡ төҫөндә
Ул иҫтә - уйҙа, хистә!

* * *

Бер нәмә лә яңғыҙ йәшәй алмай,
Берҙәмлектә - ерҙең көсө лә.
Ошо тойғо менән быуат-быуат
Һис еңелмәҫ булған кеше лә.

Дуҫлыҡ өсөн, хаҡлыҡ, сафлыҡ өсөн,
Ниндәй утҡа, һыуға кермәнек,
Барыһын да туғанлыҡта таптыҡ.
Бөтәһен дә еңде берҙәмлек!

* * *

Замандың килде сәйере:
Телдә һәм илдә - баҙар...
Ләкин туғанлыҡ, дуҫлыҡты
Баҙарға сығармайҙар.

Ул - күңелдә, ул - йөрәктә:
Ваҡланмай һәм һатылмай.
Берҙәм булһаҡ, татыу торһаҡ,
Беҙ хазина - алтындай!

* * *

Тарих битен тағы аҡтарабыҙ,
Асыҡлайбыҙ, ағын, ҡараһын:
Өр-яңынан илгә ҡайтарырға
Һәр нәмәнең ысын баһаһын.

Һәр шәхесте, һәр аҙмышты юллап,
Төбәлгәндә үткән юлдарға,
Иҫтәр китә: мылтыҡ төҙәгәндәр
Ил терәге булған улдарға.
Атайҙарға, ағайҙарға яҡҡан
Һөрәмдәрҙән йөҙҙә һөрткәндә,
Нинә тарих болғатырға, тиеп
Шыңшып ҡуя ҡай саҡ ҡай бәндә.

"Болғатмайса" нисек ҡайтараһың
Ил намыҫын, кеше выжданын?
Белһен тарих: мыйыҡ бора-бора
"Ер аллаһы" зиндан ҡорғанын,
Портреттарын күккә сөйгән саҡта
Ялсылары ниҙәр ҡылғанын.

Тик баһалар хәҡиҡәттән торһон,
Бөтәһенә ҡара яҡмайыҡ.
Шәхестәрҙе һәм тарихтың үҙен
Ялған баһаларҙан яҡлайыҡ!

Үҫ алырға сығарылмай хөкөм -
Көс, һабаҡ һәм аҡыл алырға.
Бары халыҡ, бары хаҡлыҡ менән
Киләсәккә бергә барырға.

Тарих битен ҡат-ҡат аҡтарырбыҙ,
Асыҡларға ағын, ҡараһын.
Ил дуҫлығы - берҙәм аҡыл менән
Бирер халыҡ ғәҙел баһаһын.

* * *

Иҫке хәҡиҡәт булһа ла
Ҡабатлайыҡ беҙ тағы:
Донъяла иң ҙур хазина
Ул - дуҫлыҡ матурлығы.

* * *

"Оло милләт..." "Кесе милләт..."
Ундай милләт булмай.
Шулай атаусылар -
Олоһон да, кеçеһен дә -
Икеһен дә хурлай.

* * *

Милләтте милләт кәмһетһә,
Халыҡты ҡыҫа халыҡ:
Енәйәт - бындай сәйәсәт,
Хаинлыҡ - бындай хаҡлыҡ.

* * *

Бөтә ерҙә дуҫлыҡ хөкөм һөрһөн,
Һәр берәүҙе дуҫлыҡ ҙурлаһын.
Дуҫлашырға ғәҙәт, сәбәп булһын,
Юлын бер кем, бер ни быумаһын.

* * *

Азат булырға теләһәк,
Дуҫлыҡ ҡоло булыу кәрәк.

* * *

Менһәң дуҫ-туғанлыҡ атына -
Етерһең маҡсатыңа.

* * *

Рух, көс һәм ныҡлыҡ кәрәк һәр ерҙә:
Ул - дуҫлыҡ дәрәжәһен төшөрмәүҙә.

* * *

Именлек, хөрмәт булыр ереңдә,
Дуҫлыҡ һәм ғәҙеллек булһа илеңдә.

**РЕДАКЦИЯНАН: Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығына арнап, гәзитебеҙҙә "Мин белгән урыҫ" тигән рубрика булдырғайныҡ, хәтерегеҙҙәлер. Башҡортостан тигән гүзәл илдең хужалары - башҡорттар йәнәшендә, дуҫлыҡта, татыулыҡта, башҡорттоң телен, мәҙәниәтен өйрәнеп, үҙләштереп, ғөрөф-ғәҙәттәрен һанлап йәшәгән рус кешеләре тураһында ине был рубрикала яҙылған мәҡәләләр. Быйылғы йылдың Башҡортостанда "Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы" тип нарыҡланыуын иҫәпкә алып, баяғы рубриканы яңыртырға булдыҡ. Тик ул ҡайны милләт вәкиле тураһында яҙыуығыҙға ҡарап, үҙгәреп торор. Мәҫәлән, "Мин белгән татар", "Мин белгән сыуаш" һ.б. Хаттар көтәбеҙ.**

**✓ Ирен буяуында химик ингридиенттар күләме яҡынса 33, тире өсөн лосьондарҙа - 32, туштә - 29, ҡул өсөн кремда 11 процент. Ҡайһы бер биҙәнеү әйберҙәрендә химикаттар күләме 400 төргә етә.**



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨСЛӨ ЗАТ ТА...

## матур булырға ынтыла

■ Американың пластик хирургтар йәмғиәтенән белдереүҙәренсә, һуңғы осорҙа матурыраҡ күренеү маҡсатында хирург бысағы аҫтына ятыусы ир-ат күбәйгән. Былтыр көслө зат 1,1 миллион косметик операция яһатҡан, был 2009 йыл менән сағыштырғанда 2 процентҡа күберәк. 14 процентҡа йөҙ мускулдарын тарттырыусылар артҡан, липосакция (ҙур булмаған тишектәр аша артыҡ май ҡатламын һурҙырып алыу), күҙ ҡабаҡтарын коррекцияларға теләүселәр ҙә бермә-бер күбәйгән. Бынан тыш, хәҙер ир-егеттәр бит тиреһен таҙартыу өсөн табиптарға йышыраҡ мөрәжәғәт итә икән.

■ Генетиктар һәм нейропсихологтар фекеренсә, элек абсолют ишетеү һәләте һәр кешелә тыумыштан булған, әммә эволюцион процесс барышында практик ҡулланылыш тапмағанға күрә юғалып ҡалған. Бөгөн абсолют ишетеү һәләте кешеләр араһында бик һирәк осрай. Белгестәр әйтеүенсә, мең кешенең береһеһе генә бындай сифатҡа эйә. Көнсығыш телдәре тональ телдәргә яҡын булыу сәбәпле, Азия кешеләрендә ишетеү һәләте юғарыраҡ, улар соната, симфонияларҙы еңелерәк ҡабул итә икән. Шулай ҙа азиаттар араһында билдәле музыканттар һаны европалыларға ҡарағанда күберәк түгел, ти тикшеренеүселәр.

■ Ғалимдар асыҡлауынса, ир-ат үҙен 58 йәштә генә ҡарт тип тоя башлай, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа был тойғо 29 йәштә үк барлыҡҡа килә. Билдәләнеүенсә, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы гүзәл заттың 25 проценты башында беренсе сал сәс күренгәс тә, ҡартайҙым, тип уйлай. Ир-ат үҙенең ҡартайыуын түшәктә проблемалары башланғас ҡына һиҙеп ҡала. Психологтар әйтеүенсә, был енестәр араһындағы айырмалар менән түгел, ә йәмғиәттең матурлыҡ һәм йәшлеккә ҡарата ҡарашы менән аңлатыла. Заман ҡатын-ҡыҙы телевизор экраны, башҡа матбуғат саралары тыуҙырған идеалдарҙан ситләшә башлау менән үҙен ҡарт һәм йәмһеҙҙәр рәтенә индереп ҡуйырға ашыға. Ланкастер университетының психология профессоры Кэри Купер әйтеүенсә, ир-егетте үҙенең тышҡы ҡиәфәте артыҡ борсомай, ул йышыраҡ яҡшы һөйәр булып ҡалыуҙы өҫтөнөрәк ҡуя. Профессор Купер билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙ 30 йәштә ғаилә ҡороуға, балалар тәрбиәләүгә тулыһынса әҙер булһа, был йәштәге ир-аттың уйында тәү сиратта карьера тора һәм улар пенсияға киткәнсе үҙен йәш тоя.

■ Ә ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ араһындағы тойғолар ҡасан көслөрәк була, тип уйлайһығыҙ? Канаданың Монреаль университеты ғалимдары кеше ни тиклем олораҡ, улар араһында тойғолар ҙа көслөрәк, тип иҫәпләй. Белгестәр быны махсус иҫәпләү системаһы ярҙамында асыҡлаған. Оло йәштәгеләр әйтеүенсә, бәхетле ғаилә тормошоноң рецебы ябай ғына: ир менән ҡатын бер-береһе менән ни тиклем күберәк аралаша, тойғолар ҙа шул тиклем көслө була.

■ Гүзәл зат көн һайын биткә һөртә торған 13 төрлө косметик продукт ҡуллана, уларҙың күбеһендә 20-нән артыҡ төрлө химикат бар икән. Ирен буяуында химик ингридиенттар күләме яҡынса 33, тире өсөн лосьондарҙа - 32, туштә - 29, ҡул өсөн кремда 11 процент. Ҡайһы бер биҙәнеү әйберҙәрендә химикаттар күләме 400 төргә етә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Ҡасандыр урта быуаттарҙа хаҡы алтынға тиңләнгән, ҡан ҡойошло һуғыштарға алып килгән тоҙ тураһында бөгөн дә төрлө имеш-мимештәр тынмай. Кемдер уны "аҡ үлем" тип атай һәм күп ауырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүендә ғәйепләй, кемдәрҙер, киреһенсә, тоҙ менән дауалана. Шулай булғас, тоҙ кеше организмы өсөн файҙалымы әллә зарарлымы? Был һорауға яуап биреү өсөн тоҙҙоң ҡайҙа һәм ни өсөн ҡулланылыуын асыҡлап ҡарайыҡ.**



# ТОҘҺОҘ ҘА АШАМА,

## артыҡ тоҙлама ла

### Тәғәйенләнеш пункты: организм

Тоҙ нигеҙҙә натрий һәм хлорҙан тора, улар кеше организмының бөтә биологик шыйыҡсаларында ла бар. Натрий иондары аминокислота һәм шәкәрҙең күҙәнәк эсенә үтеп инеүенә ярҙам итә. Натрий һәм хлор ашҡаҙан һутының барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә, бынан тыш натрий һәм хлор иондары организмдың һелте балансын һаҡлауҙа ла мөһим роль уйнай. Тоҙ ҡан һәм башҡа туҡыма шыйыҡсалары составына инә, уның һыуҙағы иҙелмәһе медицинала киң ҡулланыла.

Әгәр ҙә рациондан тоҙҙо алып ташлаһаң, организмда шунда уҡ тоҙ балансы боҙола, мускулдар тартышыуы башлана, кеше тиҙ арый, һыуһай башлай, аппетиты юғала, сөнки хлорлы натрий дефициты мөләндә организм уны туҡымаларҙан һәм ҡандан ала.

### Тәғәйенләнеш пункты: туҡланыу

Тоҙһоҙ аштың бөтөнләй тәме юҡ кеүек. Шулай ҙа диетологтар был тәмләткесте артыҡ ҡулланырға кәңәш итмәй. Улар фекеренсә, организмға тәүлегенә 6 грамм тоҙ етеүенә ҡарамаҫтан, кеше көнөнә уртаса 10-30 грамм тоҙ ашай. Тоҙло ашһыу тәм рецепторҙарын ҡуҙғытып, асығыу тойғоһон барлыҡҡа килтереү һәләтенә лә эйә. Һөҙөмтәлә, артыҡ ашау һимереүгә килтерә, тимәк, таяныу-хәрәкәт аппаратына һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына көс төшә. Ашты артыҡ тоҙлап ашау шешенеүгә, артериаль ҡан баҫымының күтәрелеүенә булышлыҡ итеүе бар.

### Тәғәйенләнеш пункты: бальнеотерапия

Тоҙ менән дауаланырға ла була тигәйнек. Бальнеотерапия (латин теленән "һыу инеү") йәки һыу менән дауаланыу тигән термин да бар. Тоҙ тиреңең өҫкө ҡатламына үтеп инеп, эпидермисты артыҡ кибеүҙән һаҡлай. Бынан тыш, табиптар тире ауырыуҙарынан ҡотолоу өсөн дә тоҙ ванналары тәҡдим итә. Тоҙ матдәләр алышыныуын да яҡшырта. Шуға ла ныҡ арығанда, стрестар мәлендә тоҙ ванналары инергә кәрәк.

### Тәғәйенләнеш пункты: спелеотерапия

Ер шарында тоҙ (карст) мәмерйәләре бар, унда өҫкө тын юлдары сирҙәренең иң ауыр формалары юҡҡа сыға. Бындай мәмерйәләрҙең микроклиматы үҙенсәлекле, унда температура, барометрик баҫым үҙгәрмәй, дымлылыҡ түбән, ә мәмерйә һауаһындағы кире зарядлы иондар күберәк булғас, бактериялар бөтөнләй булмай. Быларҙың барыһы ла спелеотерапияның нигеҙенә яткан. Тоҙ мәмерйәләре хроник ҡурылдай сиренән дауаланыу өсөн файҙалы.

### Тәғәйенләнеш пункты: таҙартыу

Тоҙ - тәбиғи таҙартыусы. Мәҫәлән, диңгеҙ һәм океандар даими рәүештә экологик бысраныуҙарға дусар булһа ла, тоҙло һыу ярҙамында улар тиҙерәк таҙарына. Бынан тыш, тоҙ бөтә негатив энергияны һурып алыусы энергетик адсорбент һанала. Был тоҙ структураһының үҙенсәлекле структураһына бәйле.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Баш ауыртыуынан һыуытылған тоҙ һалынған сепрәк ярҙам итер. Уны 10-15 минутҡа маңлайығыҙға һалып, ятып торогоҙ. Тән температураһына тиклем йылынғас, тоҙ уралған сепрәкте күҙҙәргә һалығыҙ һәм тағы ла 10 минут ятығыҙ.**

**Ангина, хроник ҡурылдай, һалҡын тейеүҙән дә тоҙ ҡотҡарыр, тик температура булмаҫҡа тейеш. 1 килограмм тоҙҙо табала йылытығыҙ, уға 2-3 ҡалаҡ әсе борос йәки горчица өҫтәгеҙ. Ҡатнашманы таҫҡа һалығыҙ, ойоҡтар кейегеҙ һәм тоҙ һыуынғансы аяҡтарҙы тығып ултырығыҙ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## Ерҙәге ожмах сағылышы ул

### Айырылышырға була ла ул...

Төптән уйланылмаған никахтарҙың ҡайғылы эҙемтәләрен һанап бөтөрөрлөк түгел. Былар бөтәһе лә иң тәү сиратта өй усағында күңел йылыһы тапмай һәм атаәсәләре тарафынан насар мөнәсәбәттәргә дусар булып, урамдарҙа ышыҡ тапкан, ошо аркала алкоголь, наркотиктар һәм башҡа тәрбиәһеҙ тормоштоң тәьҫиренә бирелгән балаларҙа күренә. Былар бөтәһе лә бер ниндәй файҙа килтермәгән ерҙең ташландыҡ өләшө кеүек йәмғиәт барлыҡҡа килеүгә алып килә.

Шулай ҙа айырылышыуға ҡарата Исламда мөһим нескәлек бар. Мосолмандарҙың никахы католик диндән, мәҫәлән, шуныһы менән айырыла: католик дининдә айырылышыу ҡәтғи рәүештә тыйыла һәм ир менән ҡатын ғүмерҙәре бөткәнсә үҙҙәренең хәле менән риза булырға тейеш. Исламда ике яҡтың береһен ҡәнәғәтләндермәүсе ниндәйҙер хәлдәр килеп тыуа ҡалһа, никах килешеүе яңыһы менән дә алмаштырылыуы мөмкин. Шәриғәт ҡанундары шундай. Ҡаршы осраҡта, айырылышыуға хоҡуғы булмаған унышһыҙ никах ир менән ҡатын өсөн ғүмерлек ғазапҡа әйләнер ине. Ҡотолғоһоҙ хәлдә ҡалған парҙар, ахыр сиктә, ireш-талаш һәм нәфрәт батҡағына батыр ине. Ошо сәбәпле Ислам айырылышыуҙы рөхсәт итә һәм был хоҡуҡҡа өҫтөнлөктө ир-егеткә бирә.

Был ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте буйынса хис-тойғолы булыуы менән аңлатыла. Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙ үҙе лә айырылышыуҙы талап итеү хоҡуғына эйә. Ислам хоҡуғында был "тәуфуид әл-талаҡ" (айырылышыуға хоҡуҡ бирелеү) тип атала. Хатта бындай шарт ҡуйылмаған осраҡта ла, ҡатын-ҡыҙҙың кәрәк булған осраҡта тейешле рәсми органдарға мөрәжәғәт итергә хоҡуғы бар.

Шулай итеп, ир менән ҡатын-ҡыҙ бер-береһен ҡәҙерләргә һәм һаҡларға осраҡта ғына кәрәк булмаған айырылышыуҙарҙан ҡасырға була. Ир менән ҡатындың бәхетле көндәре бер-береһенә булған тоғролоҡ, ихласлыҡ һәм ныҡлы иман ярҙамында барлыҡҡа килгән күңелле хәтирәләр, аралашыу шатлығы, именлек, тынyслыҡ һәм ҡәнәғәтлек кеүек илаһи критерийҙар менән үлсәнә. Бер хәҙистә әйтелә: "Әгәр кем дә булһа төн уртаһында ике рәкәғәт булһа ла намаҙ уҡыр өсөн ҡатынын уятһа, улар икеһе лә Аллаһы Тәғәләне маҡтаусылар булып яҙылыр".

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -



## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

### Урманһыҙ кәсеп булмай

**Ғәрәп Әхмәт ибн-Фаҙландың яҙмаларынан һуң башҡорттар һәм солоҡсолоҡ кәсебе тураһында бәйән ителгән баҫмалар байтаҡ ҡына. Улар араһынан бер тарихи хеҙмәт тураһында айырым яҙып китеү кәрәктер. Һуҙ 1760 йылдарҙа тарихи башҡорт ерҙәрендә эшләгән Ырымбур экспедицияһы тураһында бара. Шул ваҡытта географ, тарихсы һәм этнограф Петр Иванович Рычков солоҡсолоҡ һәм бал ҡорттары тураһында бай йөкмәткеле мәғлүмәт туплай һәм бал ҡорттарына арналған хеҙмәтен баҫтырып сығара. Бына шулай, фән өлкәһендә бал ҡортона бағышланған яңы йүнәлеш тап беҙҙең башҡорт ерлегенән һәм солоҡ ҡорттарынан юл ала.**

Барлыҡ хеҙмәттәрҙә барлап сығып, тағы ла бер мөһим һығымта яһарға була: солоҡсолоҡ кәсебе туранан-тура урман менән бәйле. Был үҙенән-үҙе аңлашылып тора: ҡарағай (имән, ҡарағас, уҫаҡ) булмаһа, солоҡ юнып булмай ҙа инде. Әммә кеше тәбиғәт биргән оло бүләкте, урманды нисек ҡулланған, хәҙер нисек тотона, иң мөһиме, уның киләсәге ниндәй: был турала айырым һөйләшеү кәрәктер.

Элек халыҡ урманға хөрмәт менән ҡараған, урман байлығын бик һаҡсыл ҡулланған. Ул дөйөм халыҡ байлығы булып иҫәпләнгән. Миҫал өсөн бер генә яҙмаға күҙ һалайыҡ әле. 1627 йылда нәшер ителгән "Ҙур һыҙмаға китап йәки Рәсәй дәүләтенең боронғо картаһы" тип аталған хеҙмәттә башҡорттар һәм уларҙың шөғөлө тураһында ошондай мәғлүмәттәр бар: "Ағиҙел йылғаһы тамағынан алып Урал тауҙарына тиклем бөтә урында башҡорттар йәшәй. Улар бал, кейек һәм балыҡ менән ризыҡлана, ә һөрөнтө ерҙәре юҡ". Күреп тораһығыҙ, урындағы халыҡ урман көсө менән йәшәгән. Мал көтөп, бесән сапҡан, емеш-еләк йыйған, һунар иткән, солоҡ юнған, утын әҙерләгән, бура бураған. Сағыштырыу өсөн, әйтәйек, бөгөн Бөрйән районында көн иткән халыҡ һаны менән шул замандағы халыҡ һаны бер сама булып сыға, ә шулай ҙа хәҙер беҙ урманды күпкә тәләфләп тотонабыҙ.

Тарихсы-ғалимдар эштәренән күренеүенсә, башҡорт урмандарына һиҙелерлек зыян 1736 йылдан башланып китә. Шул йылда сыҡҡан указға ярашлы, башҡорт ерҙәрендә тимер һәм баҡыр иретеү заводтары төҙөлә башлай. Уларҙың киләсәге туранан-тура урманға бәйле булып сыға. Дәлил бик көслө: завод төҙөгән ваҡытта уның руда яткылығына яҡын булыу-булмауы төп шарт булмаған. Руданы ат менән дә ташып була бит. Буласаҡ заводҡа иң тәүге сиратта урман, дөрөҫөрәге, уның ағасы кәрәк булған. Заманында тимер-баҡыр иретеү өсөн ташкүмер ҡулланыу ысулы билдәле булмаған. Шуға күрә төп көс урманға төшкән. Заводтарҙың йылғалар буйында урынлашыуы ла бик мөһим булған. Уның барлыҡ механизмдары һыу көсө ярҙамында башҡарылған, әҙер тауар йылғалар буйлап ташылған. Бындай заводтар бик йылдам төҙөлә. Һандар шул турала һөйләй: XIX быуаттың 80-се йылдарында башҡорт урмандарында 30 металлург заводы эшләүе билдәле.

Был заводтарҙың урманға тәьҫире тураһында хәҙерге Бөрйән районының Ырғыҙлы йылғаһы буйында урынлашҡан Вознесенск заводы миҫалында ҡарап үтәйек. Уның ҡыҫҡаса тарихы ошолай. Германиянан килгән барон граф Голштинский Карл Сиверс үҙ иҫәбенә (ҡайһы бер сығанаҡтар, барон Рәсәй хөкүмәтенән алты мең ссуда алған, тип тә яҙа) ошо заводты төҙөү буйынса эш башлай. 1753 йылда завод төҙөү буйынса рөхсәт ҡағыҙы алыуға өлгәшә. 1756 йылдың 24 майында Ырғыҙлы йылғаһы буйында урынлашҡан алты мейесле завод үҙ эшен башлап та ебәрә. Был заводтың ҡеүәтен унда эшләгән кешеләр һәм төҙөлгән йорттар һанына ҡарап самалайыҡ. Завод эргәһенә 100-гә яҡын йорт төҙөлә. Сиркәүе була. Заводты 2 пушкаһы булған ҡарауыл командаһы һаҡлай. Ҡаҙан өйәҙенән заводҡа 1000 крәҫтиән беркетелә. Улар вахта ысулы менән эшләй. Бер вахта 333 кешенән тора. Һәр вахта дүрт ай эшләй. Күреп тораһығыҙ, был заводҡа күп эш көсө йәлеп ителгән. Урманға килтерелгән зыянды иретелгән баҡырға ҡарап самаларға була. 1758 йылда 3113 бот баҡыр, 1759 йылда - 2236, 1760 йылда - 5091, 1761 йылда - 5803, 1760-1765 йылдарҙа 22370 бот баҡыр иретелгән. Әлбиттә, был һандарҙан заводҡа күпме ағас талап ителеүен аңлап булалыр. Килем дә апаруҡ булғандыр. Килем тураһында ғына уйлаған сит ил кешеһе (барон Сиверсты күҙ уңында тотам), урманды һаҡларға кәрәк, тип артыҡ ҡайғырып та тормағандыр, моғайын. Әммә Вознесенск заводының ғүмере ҡыҫҡа була. 1774 йылдың 4-6 апрелендә заводты Емельян Пугачев баҫып ала. Уның ғәскәренә 70-ләп завод эшсеһе ҡушыла. Завод емерелә, май айында ул башҡорттар тарафынан яндырыла.

Урмандарға тағы өҫтәмә зыян XIX быуаттың 40-70-се йылдарынан башлап ҡуҙғатыла. Тап ошо осорҙа илдә көслө төҙөләштәр башланып китә. Уларҙы уңышлы алып барыр өсөн күп ағас талап ителә. Илдә ҡалалар-ҡасабалар ҙурая, флот үҫешә, ҙур ҡеүәткә эйә булған завод-фабрикалар эшләй башлай. Әлбиттә, уларҙың барыһы ла ағасҡа мохтажлыҡ кисерә. Бөрйән урмандарына килтерелгән зыянды Ағиҙел һәм Нөгөш йылғалары буйлап ағыҙып төшөрөлгән һалдар иҫәбенән күҙаллап булалыр. Заманында Мәкәү ауылы эргәһендә урынлашҡан иҫәп-хисап алып барыусылар ошондай һандар килтерә: 1905 йылда Ағиҙел йылғаһы буйлап 917 һал үткән. Ағып төшеп киткән барлыҡ ағастың күләме яҡынса 100-130 мең кубометр иҫәпләнә.

Әммә урмандарға иң күп зыянды XX быуат килтерә. Был осорҙа күптәр ағас әҙерләү менән шөғөлләнә. Быуат башында шәхси эшҡыуарҙар, 30-40-сы йылдарҙа бәләкәй колхоздар, 50-60-сы йылдарҙа промартелдәр һәм леспромхоздар бик көслө эшләй. Солоҡ ағастарының күп осраҡта ҡатнаш урмандарҙа үҫеүе генә уларҙы ҡотҡарып ҡала. Кешене бит иң тәүҙә таҙа ҡарағайлыҡтар ҡыҙыҡһындыра. Шуға күрә солоҡ ағастарының күбеһе бысҡы тешенә эләкмәй ҡала. Эләккән осраҡта ла ағас йығыусылар, әллә йәлләп, әллә башҡа сәбәптән, шул солоҡ ағастарын йыҡмай китә. Әммә яңғыҙы һерәйеп ултырып ҡалған был солоҡ ағасын күстәр үҙ итмәй. Үҙ мөхитенән айырылған солоҡ ағасы шулайтып яңғыҙы тороп ҡала.

1960 йылдарҙан башлап ауыл хужалығы "егәрлелек" күрһәтә башлай. Дөрөҫөрәге, уларҙы мәжбүр итәләр. Сәсеүлектәр майҙанын киңәйтеү маҡсатында буштан-бушҡа күп ағас ҡырҡыла. Әлбиттә, был эштең файҙаһы булмай. Шундай бер хәлде көләп һөйләйҙәр беҙҙә. Агрономға юғары хужанан урманды ҡырҡырға, яланды киңәйтергә һәм шунда сөгөлдөр сәсергә тигән күрһәтмә килгән. Агроном нисек кенә аңлатһа ла, юғарылағы түрәне күндерә алмай. Аңлашыла, уның үҙенә лә өҫтән күрһәтмә килгәндер инде. Ахыры, баяғы агроном да күнә, яланды киңәйтеп, сөгөлдөр сәсеп ҡуялар. Агроном көҙгө отчет ваҡытында үҙе лә һиҙмәҫтән шулай тип әйтеп ысҡындыра, имеш: "Фәлән яланға көсләп сөгөлдөр сәстерҙеләр. Барыбер үҫмәйәсәк, тип ваҡытында әйтә килдем. Шулай килеп сыкты ла. Сөгөлдөр сәстек, кишер ҙә үҫмәне".

Тап ошондай ваҡытта Шүлгән-Таш ҡурсаулығы ойошторолоуы бик ваҡытлы сара булып сыға. Уның майҙаны сағыштырмаса бик бәләкәй. Оҙонлоғо яҡынса 26 км, киңлеге 15 км самаһы ғына. Солоҡ ҡорттары өсөн бәләкәй, тип әйтмәксе булам. Шулай ҙа ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре солоҡсолоҡ кәсебен һәм Бөрйән солоҡ ҡорттарын һаҡлап ҡала алды. Быны аңлау өсөн һандарға күҙ һалайыҡ. Әгәр 1927 йылда Башҡортостанда 908 солоҡ күсе иҫәпләнһә, 1941 йылда был һан иһә ни бары 180 тәшкил итә. 1958 йылда Шүлгән-Таш ҡурсаулығы ойошторолғанда унда ни бары 32 күс кенә табыла. Бөгөн иһә хәл күпкә һәйбәт. Ҡурсаулыҡ урмандарында йыл һайын яҡынса 130 күс йәшәй. "Алтын Солоҡ" ҡурсаулығында 300-ҙән ашыу күс иҫәпләнә. Бынан тыш, тәбиғи ағас ҡыуышлығында 200-400 ҡырағай күстәр йәшәй, тип күҙаллайбыҙ.

Шулай ҙа бөгөн илдә барған үҙгәрештәр, урман сәнәғәтендәге реформалар борсоуға һала. Урманды ҡуртымға биреүҙән хафаландыра. Ил етәкселәре берҙән-бер көндө дөрөҫ ҡарар ҡабул итер, тигән өмөт бар барлыҡҡа, тик һүнләмаҫҡа ине. Хаталарҙы тәбиғәт ғәфү итмәй.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы. Башы алдағы һандарҙа).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Маҡсат - аңдың иң юғары кимәленә күтәрелеү

**Әгәр алға барыуығыҙҙы үткән һанда яҙған бер нисә якорь тоткарлап тора икән, алдағы өс көндә уларҙың береһен, артабан икенсеһен, шулай берәм-берәм юлығыҙҙан алып ташлағыҙ. Бының өсөн түбәндәге инструкцияны уҡығыҙ, нимә эшләргә икәнлеген яҡшы итеп иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ (тыныслыҡҙланыу бында миҫал итеп алынған).**

**Шәхескә кәрәкмәгән сифаттарҙы ҡайтанан программалаштырыу буйынса күнекмә:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин бигерәк тынысһыҙмын. Артабан тынысһыҙланырға теләмәйем. Һәр саҡ үҙ-үҙемә ышанысла булырға теләйем. Көндән-көн ышанысла була барам", - тип ҡабатлағыҙ.
- Үҙегеҙҙе тыныс түгелһегеҙ итеп күрегеҙ, һуңынан ошо картинаны онотторуосы башҡа күренештәрҙе күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙе тыныс һәм ышанысла итеп күрегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, үҙ хәлегеҙгә ҡайтығыҙ һәм үҙегеҙҙе ышанысла итеп тойоғоҙ.

Был күнекмәне ҡабатлап, кире сифаттарығыҙҙан арынығыҙ.

**Ҙур ҡыуаныс аңға бәйле**

Шулай итеп, беҙ ҡыуанысҡа ҡамасаулаусы сифаттарҙан арындыҡ һәм артабан алға барырға әҙербеҙ.

Тормошта ҙур ҡыуаныс бары тик ҡыуанырға ҙур һәләт булғанда ғына мөмкин. Был аңдың үҫешен талап итә. Бындай үҫешкә аңды алдап ирешергә мөмкин. Әммә был трюкты эшләгәнгә тиклем, аңығыҙ һәҙәмтәле яуап бирһен өсөн, стандарт ҡарашты ҡулланабыҙ. Хәҙер һеҙ ышанып булмаҫтай, әммә ысынбарлыҡта шулай булған тәжрибә тураһында уҡырһығыҙ. Уға ышаныу өсөн аңығыҙ юғары кимәлгә күтәрелергә тейеш.

Донъяның полиграф буйынса иң яҡшы белгесе Клив Бэкстер электроника ярҙамында үҫемлектәрҙең һәм кеше тәненең күҙәнәктәренең кире һәм ыңғай фекерҙәргә, эштәргә ниндәй мөнәсәбәт белдергәнен асыҡлаған. Барыһы ла Бэкстер Нью-Йорк полицейскийҙары алдында полиграфта эшләү буйынса лекция уҡығандан һуң башланған. Ул урынын тәртипкә килтереп, бер ыңғай ошо прибор ярҙамында бүлмә үҫемлектәренә һибелгән һыуҙың күпме ваҡыт эсендә тамырҙан япраҡҡа күтәрелеүен асыҡларға булған. Япраҡтарға электродтарҙы беркеткән, үҙе яҙа торған ҡоролманы тоташтырған һәм һыуға сыҙырға булған. Шул ваҡыт үҙе яҙа торған ҡоролма ыңғай сипылдап ҡуйған. Бэкстерға был ҡыҙыҡ булып киткән. Ул һыу килтереп ҡойған, ҡоролма тағы ыңғай сипылдап тауыш биргән. Бэкстер аптырап ҡалған, үҫемлек уның уйын уҡыймы ни? Тикшереп ҡарау өсөн ул бер япраҡты яндырып ҡарарға булған. Был турала уйлап та өлгөрмәгән, ҡоролма кире импульс ебәргән. Шик ҡалмаған, ниндәйҙер бәйләнеш каналы аша үҫемлек уның уйын уҡыған.

Артабанғы тикшеренеүҙәр тәндең фекерҙе һиҙеп тороуын асыҡлаған. Тимәк, уйланырға урын бар.

**Роберт СТОУН.**



## 18 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.45**
11.45 Мультфильм
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 9-я серия. Сериал
22.30 "Поединки"
23.30 Ночные новости
23.50 "Следствие по телу", 8-я серия
00.45, 03.05 "Народ против Ларри Флинта"
03.00 Новости
03.20 "Вспомни, что будет"

## РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.50**
11.50 "Елисеевский. Казнить. Нельзя помиловать"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 36-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 63-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 136-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Манна небесная"
23.50 "Городок"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.10 "Трое в лодке, не считая собаки", 2 серии

## НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Афера". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Детектив Раш"
02.40 "Суд присяжных"
03.55 "До суда"

## БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Экспромт". И. Муслимов**
**16.45 "Судьбы". Н. Ахметьянов**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Тюрки России. Республика Башкортостан"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.15 "Орнамент"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.30 "Надо знать!"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 19 АПРЕЛЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 10-я серия
22.30 "Поединки"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Максимальное ускорение"
02.45, 03.05 "Туман"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Ее знали только в лицо. Трагедия комика". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 37-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 64-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 137-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Я тебя никогда не забуду", 1-я и 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Мисс ТВ СССР и шесть всесильных мужчин"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Честный детектив"
03.50 "Закон и порядок"

## НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Почерк палача". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело темное"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "Кулинарный поединок"
02.00 "До суда"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Тюрки России. Республика Башкортостан"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Узаман". Абдулла Вагапов**
**16.30 Концерт. А. Сагинбаева**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Янсык"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 20 АПРЕЛЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 11-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Белый воротничок", 3-я серия. Сериал
00.40 "Лжец, лжец"
02.20, 03.05 "Второй шанс"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Проклятие Тамерлана"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 38-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 65-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 138-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Я тебя никогда не забуду", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Убийство в Каннах. Савва Морозов". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Не стреляйте в белых лебедей", 1-я серия
03.40 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00**
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Красная карточка". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Настоящий итальянец"
00.30 "Квартирный вопрос"
01.30 "Детектив Раш"
02.30 "Суд присяжных"
03.35 "Особо опасен!"
04.00 "До суда"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Янсык"**
**10.30 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.30 "Нежность и вечность башкирской шали"**
**17.45 "На страже закона"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Деревенька"**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 21 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 12-я серия
22.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.50 "Трудная мишень". Боевик
02.40, 03.05 "Газета"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Неоконченная песня. Юрий Гуляев". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 39-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 66-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 139-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Я тебя никогда не забуду", 7-я и 8-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Первосвятители"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Не стреляйте в белых лебедей", 2-я серии
03.35 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Чужой среди чужих". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Королев. Обратный отсчет". Док. фильм
00.30 "Дачный ответ"
01.30 "Детектив Раш". Сериал
02.30 "Суд присяжных"
03.55 "До суда"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.30, 20.45 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Встреча в лесу Кырлай". К 125-летию Г. Тукая**
**16.45 "Судьбы". Р. Янышев**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 22 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига
23.40 "Закрытый показ". "Душка". Драма
03.00 "Крупная рыба"

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 40-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 67-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 140-я и 141-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Фактор А". Музыкальный конкурс
22.30 "Юрмала"
00.25 "Ванечка". Мелодрама
02.40 "Отбивные". Комедия
04.20 "Городок"

## НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "История всероссийского обмана. Выход есть!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Суперстар представляет: бенефис Наташи Королевой"
23.00 "НТВшники"
00.05 "Музыкальный ринг НТВ"
01.30 "Женский взгляд"
02.15 "Трудный ребенок". Комедия
04.05 "Особо опасен!"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**14.30 "Янгантау"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 "Танцевальные ритмы планеты"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 23 АПРЕЛЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Если можешь, прости..." Мелодрама
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Илья Муромец и соловей-разбойник"
14.50 "Три тополя на Плющихе". Мелодрама
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
17.20 "Общая терапия", 9-я и 10-я серии
19.30 "Фабрика звезд. Возвращение". Музыкальное шоу
21.00 "Время"
21.20 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.20 "Пасха". Док. фильм
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.30 "Святая земля"
01.20 "Пасха Христова". Трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя
04.00 "Нечаянная любовь"

## РОССИЯ 1

05.05 "Она вас любит?"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "А счастье где-то рядом". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "А счастье где-то рядом". Сериал. Продолжение
16.15 "Субботний вечер"
17.50 "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
18.05 "Варенька. Наперекор судьбе". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Варенька. Наперекор судьбе". Продолжение
23.15 "Калина красная"
01.20 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя
04.05 "Мой серебряный шар"

## НТВ

04.55 "Холм одного дерева"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.20 "Внимание розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Сеанс с Кашпировским. Оборотень"
14.100 "Таинственная Россия"
15.05 "Очная ставка"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум"
21.00 "Искупление". Криминальная драма
22.50 "Мой грех". Мелодрама
00.55 "Эпидемия". Фантастика
03.25 "Суд присяжных"
04.30 "До суда"

## БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Л. Исмагилова. "Ходжа Насреддин". Балет БГТОиБ**
**09.30 "Третий звонок". Шекспир "Гамлет". Спектакль Туймазинского ТДТ**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Пасхальное послание архиепископа Никона"**
**13.45 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Литературный альманах"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Музыкальная шкатулка"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 "Мелодии любви"**
**23.45 Художественный фильм**

## 24 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Две сказки"
06.20 "Живите в радости"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Благословите женщину", 4 серии
16.10 Юбилейное шоу театра ледовых миниатюр Игоря Бобрина
17.40 "Мужики!.." Мелодрама
19.30 "Жестокие игры"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Познер"
00.00 "Скафандр и бабочка". Драма
02.10 "Большой удар"
03.55 "Вспомни, что будет"

## РОССИЯ 1

05.00 "И Дона выдачи нет". Драма
06.40 "Сам себе режиссер"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Утренняя почта"
08.40 "Сто к одному"
09.25 "Города и Веси"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок"
11.40 "С новым домом!"
11.50 "А счастье где-то рядом"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "А счастье где-то рядом". Продолжение
15.50 "Смеяться разрешается"
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Только ты". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.30 "Живи и помни". Драма
02.45 "Наше время"

## НТВ

05.20 "Холм одного дерева"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Русский крест". Остросюжетный сериал
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Глухарь". Сериал
00.55 "Авиаторы"
01.30 "В зоне особого риска"
02.05 "Сойлент Грин". Фантастика
04.00 "До суда"

## БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**07.45 И. Юмагулов. "Резной трон". Спектакль Сибайского ГДТ им. А. Мубарякова**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Байык представляет…"**
**19.30 "Любимое дело"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Башкорттар"**
**22.30 "Вечер.com"**
**23.15 Худ. фильм**
**00.30 "Свидание с джазом"**

*✓ Телдәр - ул бөтөн нәмә! Урындағы телде белеп, мин күпме аҡса һәм күпме алыш-биреш эшләй алдым. Уларҙың телен белгән өсөн генә урындағы халыҡ нисек ихтирам итә. Күпме дуҫтар табыла!*



ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН

# ДОНЪЯ МЕНӘН ХАКИМЛЫҠ ИТКЕҢ КИЛӘМЕ?

## Телдәр өйрән!

(Дауамы. Башы 3-сө биттә).

**nickelio.** 1992-1993 йылдарҙа Польшаға 15 тапҡыр барыуымда көнкүреш кимәлендә поляк телен өйрәнеү мөмкин булды. Иранда "шокран джазилян" тигән һүҙ өйрәндем - биш көндә күп нәмәгә өйрәнеп булманы. Төрөк теле ауыр, әммә 30-40 тапҡыр барыуымда уны ла үҙләштерҙем. Тойғоларҙы әйтеп аңлатып булмай. Азатлыҡ тойғоһо. Инглиз теле 2001 йылда Дубайҙың Сауҙа-сәнәғәт палатаһына инеп, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә эшлекле партнерҙар табырға ярҙам һорау мөмкинлеге бирҙе.

Телдәр - ул бөтөн нәмә! Урындағы телде белеп, мин күпме аҡса һәм күпме алыш-биреш эшләй алдым. Уларҙың телен белгән өсөн генә урындағы халыҡ нисек ихтирам итә. Күпме дуҫтар табыла!

Әлбиттә, телдәрҙе үҙ телеңгеҙ менән генә өйрәнергә мөмкин. Әгәр һинә тел кәрәк икән - уны өйрәнәсәкһең. Юҡ икән - юҡ! Кәрәк булһа, тиҙ генә өйрәнелә, бында әүәҫлек тә иң мөһиме түгел.

Минең сираттағы телем ҡытай теле буласаҡ. 2030 йылға Ҡытай донъяла иҡтисад яғынан беренсе буласаҡ. Улар менән эшләмәү ахмаҡлыҡ буласаҡ!

**tobe_lucky.** Ошо көндәрҙә генә белеп ҡалдым: яҡын киләсәктә Рәсәйҙең Болон процесына инеүенә бәйле, ил университеттарында белем биреү инглиз телендә алып барылырға тейеш. Рәсәйҙең мәғариф өлкәһендәге реформа буйынса фекер алышыуҙы иҫәпкә алғанда, урыҫ теле мәктәптәрҙә мотлаҡ уҡытылырға тейешле фәндәр исемлегенә инмәгән...

**yagragdanin.** Балаларҙың күпселеге математика, физика, химия, хатта урыҫ теле кеүек фәндәрҙең ауырлығына, аңлашылмағанлығына, кәрәкмәгәнлегенә зарлана. Ниңә ата-әсәләр уларҙан баш тартыуҙы, уҡытыуҙы ирекле итеүҙе талап итмәй һуң? Моғайын, ирек ҡуйһаң, балалар бөтөнләй мәктәпкә йөрөмәсен, йәки физкультураға ғына барырҙарын аңлағанғалыр. Ә фәндәр, улар ниндәй генә булмаһын, иртәме, һуңмы, кәрәк буласаҡ. Ата-әсәләргә энергияларын телдәрҙе өйрәнеүҙән баш тартыуға ҡарағанда, уҡытыу методикаһын һәм дәреслектәрҙе үҙгәртеүҙе талап итеүгә йүнәлтергә кәрәктер. Был талапты ишетерҙәренә һәм барыһы өсөн дә файҙалы булырына ышаныс күберәк.

Икенсенән, балаларҙың телдәргә ҡарата бындай мөнәсәбәтен ата-әсәләр кем менәндер һөйләшкәндә, йәки үҙ-ара фекер алышҡанда, ул туған тел түгел, уны уҡырға мәжбүр итәләр, ул кәрәкмәй һәм кәрәкмәйәсәк тә, тип, үҙҙәре формалаштыра. Бындай һөйләшеү һәр өйҙә лә булмауы мөмкин, әммә балалар үҙ-ара аралаша һәм бөтөн нәмәне һеңдерә. Ахырҙа был уларҙың үҙҙәренең фекере булып китә. Әгәр ата-әсәләр башҡа фәндәргә лә шундай мөнәсәбәттә торһа, шундай уҡ хәл килеп тыуыр - был фән кәрәкмәгән кеүек тойолор ине.

Туған телен өйрәнгән балалар үсештә арттa ҡала (урыҫ телен белеү буйынса) тигән фекер - миф. Был башҡа предметтарҙы уҡытҡан уҡытыусыларҙан, балаларҙың үҙҙәренән һәм ата-әсәнән тора. Юҡһа, "ҡамасаулаусы" телдәр булмаған төбәктәрҙә балалар урыҫ телен күптән һәр береһе ныҡлы "бишле"гә белер ине. Һеҙ бындай төбәктәрҙе күп беләһегеҙме? Ә мин - юҡ. Үкенескә күрә, мин дә телдәрҙе яҡшы беләм тип әйтә алмайым. Әммә был бары тик минең генә хатам. Заманында мин дә уҡытылған башҡорт, урыҫ һәм немец теле кәрәкмәҫ тип уйланым. Хәҙер инде уларҙан тыш минә тағы ла инглиз һәм ҡытай телдәре лә кәрәк икәнлеген аңланым. Ләкин уларҙы берәү ҙә бушлай уҡытмай. Әгәр инглиз һәм немец телдәре менән мәсьәләне күп һанлы программалар, курстар, китаптар, он-лайн сервистар аша үҙ аллы ла хәл итеп булһа, башҡа телдәр менән мәктәптән башҡа ундай мөмкинлек булмаясаҡ.

Ата-әсәләр, балаларығыҙҙы уҡырға мәжбүр итегеҙ! Бушлай уҡытырға тәҡдим иткәндә, әле бушлай уҡытҡанда быны эшләп ҡалығыҙ. Ваҡытты үткәреп ебәрмәгеҙ, үҙегеҙ ҙә уҡығыҙ, зыяны булмаҫ.

**buranbay.** Мин һәр саҡ сыуаштарға һоҡландым. Улар араһында дуҫтарым күп. Үҙ телдәрен беләләр, бынан тыш, башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә лә һин дә мин һөйләшәләр. Уларҙын, минеңсә, күпселек милләттәрҙә булмағанса, күршеләреңдең телен өйрәнеүгә тыныс һәләт бар.

**sgr_1.** Башҡорт телен уҡытыу методикаһын камиллаштырыу хаҡында һүҙ алып барырға, күберәк телмәрҙе үҫтереүгә иғтибар бирергә кәрәк. Һүҙ ҙә юҡ, дәрестәр күнелһеҙ алып барыла. Әммә талантлы уҡытыусылар ҙа бар. Уларҙың тәжрибәһен башҡа мәктәптәргә лә таратырға, йәғни кадрҙар әҙерләү, уларҙың белемен, тәжрибәһен, дәреслектәрҙең сифатын камиллаштырыу менән әүҙем шөғөлләнеү зарур.

**ilshats.** Минеңсә, башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһендә "ҡамсы" түгел, "прәник" принцибы эшләргә тейеш. Башҡорт телен уҡытыу ирекле, абруйлы булырға, төрлөсә дәртләндерелергә тейеш. Ул саҡта инде уны өйрәнеү башҡорт булмаған милләттәр өсөн нигеҙ буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кем телдәр белә, ул мәғлүмәтте тәүсығанаҡтан ала. Ә мәғлүмәт һәр заманда ла мөһим көскә эйә булған, сөнки кем мәғлүмәткә эйә - шул донъя менән хакимлыҡ итеү мөмкинлегенә эйә. Бигерәк тә беҙҙең заманса мәғлүмәт технологиялары көндән-көн тормошобоҙға ныҡлы үтеп ингән мәлдә телдәр белмәү - бер аҙым артҡа сигенеүгә бәрәбәр. Тел белеү, шул телдә аралашыу, уны һаҡлап ҡалыу һөҙөмтәһендә башҡорттар 4 мең йыллыҡ тарихы булған бөйөк "Урал батыр" эпосын беҙҙең көндәргә килтереп еткергән, тел белгестәре уны төрлө телдәргә тәржемә итеп, донъя буйлап тараткан һәм киләсәктә Интернет аша таратасаҡ - шунда күренә лә инде телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең дә, бөйөклөгө, донъяуи хакимлығы.**

Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.


## "КОРАДО"

**колорадо ҡуңыҙын юҡҡа сығара!**

**Баҡсасылар өсөн колорадо ҡуңыҙы менән көрәш төп проблемаларҙың береһе булып ҡала. Был ҡортҡос менән көрәшер өсөн баҡса үҫтереүселәр араһында киң билдәле "КОРАДО" препараты тәҡдим итәбеҙ.**

■ Ул колорадо ҡуңыҙҙарын 100 процентҡа юҡҡа сығара. Препаратҡа бирешмәгән ҡуңыҙ төрҙәре юҡ.

■ **"КОРАДО"** препараты менән эшкәрткәндән һуң картуф үҫентеһендә 3-4 аҙна колорадо ҡуңыҙҙары бөтөнләй үрсемәй, шуға ла картуфҡа уны йәй миҙгеле ваҡытында бер тапҡыр ғына һиптереү ҙә етә. Препараттың иңһәй яғы шунда: ул картуф бүлбеләренә үтеп инмәй һәм унда йыйылмай.

■ **"КОРАДО"** бөтә һауа шарттарында ла яҡшы эшләй, ул йәйге эҫелә лә, ҡойма ямғырҙа ла файҙалы үҙенсәлектәрен юғалтмай. 1 сутый ерҙе эшкәртеү өсөн 10 литр һыуға 1 мл препарат етә.

■ **"КОРАДО"** колорадо ҡуңыҙын юҡҡа сығарып ҡына ҡалмай, ә баҡсасылар өсөн яҡшы таныш булған, ағастарға, ҡыуаҡлыҡтарға һәм баҡса сәскәләренә зыян килтереүсе бетсәләрҙе лә үлтерә. Үҙ ваҡытында сифатлы итеп ағастарҙы һәм сәскәләрҙе бер тапҡыр эшкәртеү яҡшы уңыш алыу өсөн мөмкинлектәр булдыра.

■ **"КОРАДО"** бик уникаль препарат.

**"КОРАДО"ны магазиндарҙа һәм баҙарҙарҙа һатып алырға була.**

Тауар сертификация үткән.

## "АЛАТАР"

**28 төрлө баҡса ҡортҡосона ҡаршы!**

Был универсаль препарат, уны баҡса үҫентеләренә зыян килтереүсе төрлө ҡортҡостарға: япраҡ ҡуңыҙҙарына, колорадо ҡуңыҙына, кәбеҫтә күбәләгенә, баҡса ҡырмыҫҡаларына, бетсәләргә һ.б. ҡаршы көрәшкәндә ҡулланырға ярай. **"АЛАТАР"** составындағы малатион һәм циперметрин матдәләре уның көсөн икеләтә арттыра. Ул ҡортҡостарҙың артабан үрсеүен дә туҡтата.

**"АЛАТАР" препаратын магазиндарҙа һәм баҙарҙарҙа һорағыҙ.**

Тауар сертификация үткән.


ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠЫҘ-ҠАТЫНДАР ҺЫЛЫУЛЫҒЫ...

## ихласлыҡта һәм ябайлыҡта икән дә

**Ишембай ере - тәбиғәт һәйкәлдәренә, ер аҫты байлыҡтарына, талантлы шәхестәргә генә түгел, ә һылыу-һылыу ҡыҙҙарға һәм матурлыҡҡа ғашиҡ кешеләргә бай төбәк икәнлегенә тағы бер ҡат инанылды ошо көндәрҙә. Йыл һайын тәбиғәттең иң күркәм миҙгелендә ойошторолған республика "Һылыуҡай" конкурсы алдынан Башҡортостандың барлыҡ ҡала һәм райондары үҙҙәрендә "Һылыуҡай" бәйгеләре уҙғара. Ошондай гүзәллек бәйгеһенең беренсе - "Ишембай һылыуҡайы - 2011" конкурсын тамаша ҡылыу бәхете беҙгә лә тейҙе.**

Күреү бәхете тейҙе, тип әйтеүем бушҡа ғына түгел, республика кимәлендәге конкурстан бер яғы менән дә ҡалышмаған, хатта бер баҫҡысҡа юғарыраҡ торған был конкурс күнелдәрҙә әле бик оҙаҡ һаҡланасаҡ йылы һәм иңһәй тәьҫораттар ҡалдырҙы. Улай ғына ла түгел, йыл һайын республика "Һылыуҡай" конкурсының гала-концертынан һуң "Ә нимә етеңкерәмәне һуң әле был конкурсҡа?" тигән башта бер туктауһыҙ әйләнгән һорауға өләшләтә яуап та табылғандай булды Ишембайҙа. Баҡтиһәң, ихласлыҡ һәм ябайлыҡ ҡына кешенең тышҡы һәм эске матурлығын тулы ҡеүәтендә баҙыҡландырып ебәреү һәләтенә эйә икән. Милли асылындан тайпылыу, сит милләт, сит ил йондоҙҙарына оҡшарға маташыу теләге, етмәһә, шоу-тамаша ҡыҙҙарыбыҙҙы Ҡар батшабикәһенә әүерелдерә: матур, әммә йылытмай. Ә Ишембай һылыуҡайҙары тап ихласлығы, эске матурлығы менән таң ҡалдырҙы.

Дауамы 16-сы биттә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 апрель "Беҙ ҡабыҙған уттар һүнмәһен..."** исемле ҙур концерт. Унда филармония ветерандары сығыш яһаясаҡ.

**21 апрель** Башҡортостандың халыҡ артисы Фәдис Ғәниев һәм Лилиә Биктимерова **"Йыр һөйгәндәр ҡартаймай..."** исемле шоу-программа тәҡдим итә.

**22 апрель** филармонияның Орган залында Әлфиә Кәлимуллина **"Халҡым моңо"** тип аталған тамашаға саҡыра. Билдәле сәхнә осталары ҡатнашлығында үтәсәк тамаша моңло йырҙар, дәртле бейеүҙәр, ҡурай, думбыра һәм ҡумыҙ моңдарынан тора.

**Концерттар 19.00 башлана.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠЫҘ-ҠАТЫНДАР ҺЫЛЫУЛЫҒЫ...

## ихласлыҡта һәм ябайлыҡта икән дә


Динә Нәҙерғолова.
Ырыуҙың йөҙөк ҡашы булған ҡыҙ кейеме.


Эвелина Шәрипова.
Туй кейеме. Еләң, көмөш түшелдерек.


Гүзәлиә Ҡаҙаҡколова.
Һуғышсы ҡыҙ кейеме.

(Башы 15-се биттә).

Тағы ла һылыуҡайҙар матур итеп туған телдә һөйләшә белеүе менән ихтирам тойғоһо уятты. "Ишембай ҡыҙҙары буй-һыны, матурлығы менән генә түгел, саф башҡорт телендә һөйләшеүе менән дә айырылып тора", - тип быны һыҙыҡ өҫтөнә алғайны Ишембай милли мәҙәни үҙәге директоры Кинйә Әхмәҙиев. Конкурс, ысынлап та, ниндәйҙер кимәлдә район тамашасылары алдында башҡорт телен пропагандалау йәһәтенән дә оло эш башҡарҙы. Матур һөйләшеү генә түгел, үҙҙәренең туған телгә, башҡорт халҡына, тыуған ергә һөйөүен, яҡынлыҡ мөнәсәбәтен дә белдерҙе бит ҡыҙҙар. Быны баһалау комиссияһы ағзалары ла билдәләп китте. Киләсәктә матурлыҡ конкурсында ҡатнашырға теләгән ҡыҙҙарҙың күңеленә лә уңышлы, сибәр башҡорт ҡыҙы үҙ туған телендә һөйләшергә тейеш, тигән орлоҡ һалынды, башҡорт телендә уҙғарылған конкурстарҙың да баһаһы бермәбер артты.

"Башҡорт ҡыҙы инсафлы, эшһөйәр булырға тейеш. Беҙ йәш саҡта ла һылыулыҡты уңғанлыҡ, тыйнаҡлыҡ менән баһалайҙар ине, әле лә шулай. Үҙем дә ҡыҙҙар үҫтерәм һәм уларҙа иң тәүҙә ошо сифаттарҙы тәрбиәләргә тырышам", - тип әйткәйне Биксән ауылынан тамаша ҡарарға килгән Гөлдәр апай Үмәрғәлина. Тимәк, матурлыҡ бизмәнгә һалып үлсәнә торған әйбер булмаһа ла, халҡыбыҙҙа уны билдәләүсе төшөнсәләр һаман үҙгәрешһеҙ ҡала. Конкурста ҡатнашыусы ун ҡыҙ ҙа ошо сифаттарҙы - мөләйемлеген дә, уңғанлығын да, һылмалығын да, моңға ла, бейеүгә лә, өҙҙөрә баҫып атлау буйынса ла маһирлығын күрһәтә алды. Был сифаттар ҡыҙҙар сәхнәгә халҡыбыҙҙың тарихын һәм көнкүрешен билдәләгән боронғо кейемдәр кейеп сыҡҡанда тағы ла балҡып киткәндәй булды. Был үҙенсәлекле кейемдәр, көмөш һәм алтын биҙәүестәр Ишембай милли мәҙәни үҙәгенә ҡараған "Юрматы" йәмәғәт-этнографик музейында һаҡлана икән. Башҡорт тарихын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән Сергей Руденконың Стәрлетамаҡ өйәҙенә экспедицияһы ваҡытында тәржемәсе булып йөрөгән Кузьма Грибовский йыя башлаған көмөш-алтын әйберҙәр коллекцияһын унының ейәне Владимир Иванович Бессаренко тулыландырған, күп әйберҙәр киренән тергеҙелгән.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Ишембай һылыуы - 2011" конкурсында "Наҙлы" номинацияһына - Юлиә Ғималетдинова, "Һомғол" номинацияһына - Гөлнара Хәбирова, "Ягымлы" номинацияһына - Эвелина Шәрипова, "Тамашасылар һөйөүе" номинацияһына - Ләйсән Ибраһимова, "Өмөт" номинацияһына - Зөлфиә Төхвәтуллина, "Серле" номинацияһына Регина Ғарифуллина лайыҡ булды.**

**Өсөнсө урынға Һайран һылыуы Гүзәлиә Ҡаҙаҡколова, икенсе урынға Петровск ауылынан Динә Нәҙерғолова, беренсе урынға Ҡолғона ауылынан Гүзәлиә Усманова сыҡты. Гран-при Биксәндән XI синыф уҡыусыһы Регина Мырҙағәлинаға тапшырылды.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**


Регина Ғарифуллина.
Оло ҡатын кейеме. Түшендәге билдәләр уның күп бала әсәһе булыуы тураһында һөйләй.


Зөлфиә Төхвәтуллина.
Йәш ҡыҙ кейеме.
Түшелдеректәге аҡ төҫ ҡыҙҙың сафлығын белдереп тора. Ҡыҙҙың билендә көмөш тараҡ эленеп тора.


Регина Мырҙағәлина.
Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме.
Түшелдерек, баш кейеме - таҫтар. Кейем ағартылмаған етендән тегелгән.


Ләйсән Ибраһимова.
Сәсен күрһәтеп йөрөргә хоҡуҡлы йәш ҡыҙ кейеме. Баш кейеме - маңлайса.


Гөлнара Хәбирова.
Ырыу инәһенең юл кейеме.
Баш кейеме - кәләпүш, муҡса.


Гүзәлиә Усманова.
12 йәшкә тиклемге ҡыҙ кейеме.


Юлиә Ғималетдинова.
Алтын Урҙа осорондағы ханбикә кейеме. 1500 йыл.
Алтын түшелдерек, алтын биҙәүесле баш кейеме, алҡалар.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МӨХӘББӘТҺЕҘ НИКАХМЫ,

## әллә никахһыҙ мөхәббәтме?

Ҡарт өсөн дан ҡарсыҡ өсөн ынйымәрйен кеүек: уны биҙәй, әммә матурлай алмай.

**(Ф. Шатобриан).**

Мөхәббәтһеҙ никахҡа ҡарағанда никахһыҙ мөхәббәт яҡшыраҡ түгелме?

**(Г. Матюшов).**

Енси теләк кеше йөрәгенә һөйөү күләгәһе булып инеп алдата. Ләкин ул һөйөү түгел.

**(В. Соловьев).**

Етди кешенең идеялары аҙ. Күп идеялар менән янғандар етди түгел һәм уларға ышаныуы ҡыйын.

**(П. Валери).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: Кәбир ғүмер буйы Бенареста йәшәй. Ә һиндтар Бенареста үлгән кешенең тура ожмахҡа эләгеүенә ышана. Шунлыҡтан кешеләр был ҡалаға махсус рәүештә килеп донъя ҡуялар. Кәбир ҡартайып, ауыр хәлдә ҡалғас, уҡыусыларына үҙен Магахарға күсерергә ҡуша. Ә Магахар - Ганг йылғаһының аръяғында урынлашҡан бәләкәй генә бер ауыл. Был ауылда ятып үлгән кеше тура тамуҡҡа эләгәсәк, тигән кире ҡараш йәшәй. Кәбир: "Минең Магахарға күсенгем килә,"- тигәс, уҡыусылары тулҡынлана башлай: "Һеҙ аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә?"- ти улар. Әммә Кәбир һүҙенән кире ҡайтмай: "Мин Бенареста ҡалырға теләмәйем, әгәр ҙә мин теге донъяға бынан китһәм һәм ожмахҡа эләкһәм, мине ихтирам итәсәктәрме? Ихтирам Бенаресҡа тәтейәсәк. Ә мин Магахарҙа үлергә теләйем. Нисегерәк итеп мине тамуҡҡа ташлауҙарын күргем килә". Ахыр сиктә, Кәбирҙе уҡыусылары кәмәлә аръяҡҡа сығарып ҡуялар. Ул уҡыусылары менән Магахарҙа бер нисә йыл йәшәп, йән бирә. Кәбир Магахарға махсус килеп донъя ҡуйған тәүге кеше була. Был хәлдән һуң Магахар тураһындағы кире ҡараш юҡҡа сыға. Кәбирҙең бында килеп үлеүе уның кешеләргә ҡарата һуңғы мәрхәмәтле эше була. Быуаттар буйына насар мөнәсәбәттән ыҙа сигеп йәшәгән бахыр Магахар кешеләренә бөтөнләй икенсе күҙлектән сығып ҡарай башлайҙар. Бөгөнгө көндә нәҡ Магахар изге урын булып иҫәпләнә, йыл һайын барлыҡ Бенарес халҡы тиерлек Кәбиргә ихтирам күрһәтеү өсөн кәмәләрҙә аръяҡҡа йөҙөп сыға. Ә уның ҡәбер ташына ошо һүҙҙәр яҙылған: "Мин Магахарҙан тура ожмахҡа китәм".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1418